Г.Д.Зайнуллина

Türkçe-Başkurtça Başkurtça-Türkçe sözlük

Төрөкса-башкортса Башкортса-төрөкса һүзлек

G.D.Zeynullina

Türkçe-Başkurtça Başkurtça-Türkçe sözlük

Г.Д.Зәйнуллина

Төрөксә-башҡортса Башҡортса-төрөксә һүҙлек

81.2 БАШ-4
З 95

© کتابخانه شخصی
مترجم مهدی أبو أصل

Зәйнуллина Г. Д.

З 95 Төрөксә-башҡортса, башҡортса-төрөксә һүҙлек. — Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1996. — 184 бит.

ISBN 5-295-01920-9

Киң ҡулланмалы был һүҙлек мәктәптәр, гимназиялар, колледждар һәм юғары уҡыу йорттары өсөн төҙөлгән. Һүҙлек шулай уҡ ике ҡәрҙәш телде өйрәнеүселәр өсөн дә файҙалы ҡулланма булып хеҙмәт итер.

З $\frac{4602030000—57}{М\ 121/03/-96}$ 197-96

81.2 Баш-4

ISBN 5-295-01920-9

© Зәйнуллина Г. Д., 1996

ТӨРӨК ТЕЛЕ ХАҡЫНДА ҡЫҪҡАСА МӘҒЛҮМӘТ

Хәҙерге төрөк теле X—XI быуаттарҙа Анатолия ярымутрауына үтеп ингән уғыҙ-сәлжүк ҡәбилә телдәре нигеҙендә формалаша. Элек уны ғосманлы теле, ә халҡын, шул телдә һөйләшкәнгә күрә, ғосманлылар тип атағандар. Төрөк тел ғилемендә ғосманлы телен өс осорға бүлеп йөрөтәләр.

1. Иҫке ғосманлы осоро (Eski Osmanlıca) — XIII—XV б. б.
2. Урта ғосманлы осоро (Orta Osmanlıca) — XV—XIX б. б.
3. Яңы ғосманлы осоро (Yeni Osmanlıca) — XIX— XX б. б.

Беренсе осорҙа төрөк теле формалаша һәм ғәрәп-фарсы телдәренең көслө йоғонтоһо аҫтында үҫә. Был осорҙа юғары (yüksek Türkçe), урта (orta Türkçe) һәм түбән (kaba Türkçe) стилдәре барлыҡҡа килә.

Икенсе осорҙа ғосман теленең юғары стиле ғәрәп-фарсы теленән үҙләштерелгән һүҙҙәр иҫәбенә нык үҫә башлай, хатта һүҙ байлығының 90 процентын тәшкил итә. Шулай итеп, әҙәби телдең юғары стиле менән һөйләү теле араһында ҙур ғына айырмалыҡтар барлыҡҡа килә.

Яңы ғосманлы осоро Танзимат реформаһы (1839—1878) һәм «Йәш төрөктәр» революцияһына бәйле. Алдынғы ҡарашлы ҙәйптәр Намыҡ Кәмал, Әхмәт Мидхәт, Ибраһим Шинаси ҙәҙәби тел менән халыҡ телен яҡынайтыу, йәғни мөмкин тиклем ғәрәп-фарсы һүҙҙәрен төрөк һүҙҙәре менән алмаштырыу ярҙам ҡарайҙар. Был осорҙа мәҙәниәт өлкәһендә Европаға эйәреү күренеше күҙгә ташлана. Күп кенә ғилми, иҗтимағи, мәҙәни, техник терминдар француз теленән үҙләштерелә башлай. Шуны әйтергә кәрәк: яңы ғосманлы осоронда тел өлкәһендә ыңғай һөҙөмтәләргә ирешелмәй. Фәҡәт Ғосманлы империяһы емерелеп, 1923 йылғы революция еңгәс кенә, тел сәйәсәтендә киҫкен боролош яһала. Ул ваҡыттағы тел өлкәһендә күрелгән саралар «Тел революцияһы» (Dil Devrimi) тип аталды. Уның төп маҡсаты тел байлығын ҡайтанан ҡарап сығыу, стилдәр араһындағы айырманы бөтөрөү, тел нормаларын халыҡ теленә яҡынайтыу ине. Был милли хәрәкәттең башында Төрөк республикаһына нигеҙ һалыусы, уның тәүге президенты Кәмал Ататөрөк торҙо. Реформаның беренсе өлөшө ғосманлысаны (Osmanlıca) төрөксә (Türkçe) терминдар менән алмаштырыу; икенсе өлөшө — 1928 йылда ғәрәп графикаһынан латин яҙыуына күсеү; өсөнсө өлөшө — 1929 йылдан мәктәптәрҙә ғәрәп теле уҡытыуҙы туҡтатыу булды. 1932 йылда Кәмал Ататөрөк тарафынан лингвистик йәмғиәт (Türk dil kurumu) төҙөлә, ул реформаларҙың ғилми һәм ғәмәли үҙгәнә эйләнә. Реформаларҙың төп маҡсаты телде сит тел йоғонтоһонан һаҡлап алып ҡалыу, уның милли нигеҙҙәрен үҫтереү һәм артабанғы үҫешенә дөрөҫ йүнәлеш биреү.

Һуңғы йылдарҙа Башҡортостандың Төркиә йөмһүриәте менән бәйләнеше көсәйгәндән-көсәйә. Был бәйләнештәр фән, мәҙәниәт, мәғрифәт өлкәһендә

генә түгел, сауҙа кешеләре һәм эшҡыуарҙар араһында ла көсәйҙе, туризм арта бара. Башҡорт балалары Төркиә уҡыу йорттарында, төрөк йәштәре Башҡортостанда белем ала башланы. Ошо арҡала төрөксә-башҡортса, башҡортса-төрөксә-русса һәм башҡа төрлө һүҙлектәргә, һөйләшеү ҡулланмаларға, дәреслектәргә ихтыяж бермә-бер артты.

Был һүҙлек тормош үҙе талап иткән ихтыяжды иҫәпкә алып эҙерләнде лә инде. Ул ике яҡ өсөн дә файҙалы булыр һәм халыҡтарыбыҙ аралашыуына, бәйләнештәр нығыуына туранан-тура булышлыҡ итер, тип ышанабыҙ.

З. Ураҡсин,
Башҡортостан Фәндәр академияһы
академигы

ХӘҘЕРГЕ ТӨРӨК ТЕЛЕНЕҢ ФОНЕТИК ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

Түбәндә төҙөүсе тарафынан әҙерләнгән хәҙерге төрөк теленең ҡайһы бер фонетик үҙенсәлектәре, график системаһы, алфавиты бирелә һәм Төрөксә-башҡортса һүҙлектең составы, төҙөлөшө аңлатыла.

Хәҙерге төрөк телендә 29 өн бар, шуларҙың 8 һуҙынҡы өн, 21 тартынҡы өн.

Һуҙынҡыларға: **a, e, ı, i, o, ö, u, ü** өндәре инә.

a — башҡорт телендәге **a** өнө кеүек әйтелә: **baba** — атай, **para** — аҡса, **masa** — өҫтәл, **araba** — арба, автомобиль.

e — киң әйтелеше **e**, ҡайһы бер һүҙҙәрҙә ә өнөнә яҡын әйтелә: **ben**— мин, **sen** — һин, **erkek** — ир кеше, **deri** — тире.

o — башҡорт телендәге **o** кеүек әйтелә: **oda** — бүлмә, **sonuç** — һөҙөмтә, **okul** — мәктәп.

ö — киң әйтелеше башҡорт телендәге **ө** өнөнә оҡшатып әйтелә: **kötü** — насар, **köşe** — мөйөш, **ördek** — өйрәк, **önlük** — алъяпҡыс.

u — башҡорт телендәге **у** кеүек әйтелә: **kutu** — тартма, **kuş** — ҡош, **uçak** — самолет, **odun** — утын.

ü — башҡорт телендәге **ү** кеүек әйтелә: **tütün** — тәмәке, **süt** — һөт, **ütü** — үтек, **üzüm** — йөҙөм.

ı — башҡорт телендәге **ы** кеүек әйтелә: **kız** — ҡыҙ, **ışık** — яҡтылыҡ, нур, **kırmızı** — ҡыҙыл, **fırın** — мейес.

i — башҡорт телендәге **и** өнө кеүек әйтелә: **iş** — эш, **ilaç** — дарыу, **insan** — кеше, **iyi** — яҡшы, **it** — эт, **istemek** — теләү.

Тартынҡыларға түбәндәге өндәр инә. Йәйә эсендә башҡорт теленә тап килгән өндәр күрһәтелә. Мәҫәлән: **b**(б), **c**(дж), **ç**(ч), **d**(д), **f**(ф), **ğ**(ҡалын һәм нәҙек ижектәрҙә төрлөсә әйтелә), **h**(х, һ), **j**(ж), **k**(к), **l**(л), **m**(м), **n**(н), **p**(п), **r**(р), **s**(с), **ş**(ш), **t**(т), **v**(в), **y**(й), **z**(з).

Түбәндәге тартынҡылар башҡорт өндәренән бөтөнләй айырылмай тиерлек. Уларға **b, d, f, g, k, l, m, n, p, r, ş, s, t, y, z** өндәре инә. Мәҫәлән: **göz** — күҙ, **patates** — картуф, **sert** — ҡаты, **temel** — нигеҙ, **kedi** — бесәй.

Ҡалған тартынҡылар ҙа, әйтәйек, **c, ç, ğ, h, j, v** бер ни тиклем айырмалыҡ һиҙелә. Мәҫәлән:

c — тартынҡыһы ике өн ҡушылмаһынан (т + ж) тора, йомшаҡ **ж** өнө һымаҡ әйтелә: **cam** — быяла, **cep** — кеҫә, **cesur** — ҡыйыу, **cop** — таяҡ.

ç — тартынҡыһы шулай уҡ ике өн ҡушылмаһынан (т + ш) тора, рус телендәге ч өнө һымаҡ әйтелә: **çam** — ҡарағай, **çalışma** — эш, хеҙмәт, **çamur** — бысраҡ, батҡаҡ, **çok** — күп, бик, **çöl** — сүл.

ğ — һүҙ башында ҡулланылмай, ҡалын һуҙынҡылар араһында әйтелмәй: **ağaç** (аач) — ағас, **soğuk** (соуҡ) — һыуыҡ. Һүҙ аҙағында шулай уҡ ишетелер-ишетелмәҫ кенә әйтелә: **dağ** (da) — тау, **sağ** (са) — уң яҡ һ. б.

h — өнө ҡалын ижектәрҙә йомшаҡ х өнө һымаҡ, ә йомшаҡ ижектәрҙә һ өнө һымаҡ әйтелә: **hasta** — ауырыу, **hat** — һыҙыҡ, сик, **hava** — һауа, **hürmet** — хөрмәт, **horoz** — әтәс.

j — сит илдән ҡәләштерелгән һүҙҙәрҙә ҡулланыла: **jurnal** — журнал, **judo** — дзюдо.

v — рус телендәге **в** өнөнә оҡшатып әйтелә: **devlet** (дәвләт) — дәүләт, **sevgili** (севгили) — һөйөклө, ҡәҙерле, **vakit** (вакит) — ваҡыт.

y — башҡорт телендәге **й** өнө һымаҡ әйтелә: **yol** (йол) — юл, **uyku** (уйку) — йоҡо, **söyle** (сөйлә) — әйт.

ҺҮҘЛЕКТЕҢ СОСТАВЫ ҺӘМ ТӨҘӨЛӨШӨ

Төрөксә-башҡортса һүҙлеккә хәҙерге төрөк теленең матур әҙәбиәттә, публицистикала һәм ғилми терминологияла киң ҡулланылған өс меңдән ашыу лексик берәмеге алынды.

Баш һүҙ итеп алынған төрөк һүҙҙәре алфавит тәртибендә урынлаштырылды һәм башҡортса тәржемәһе бирелгәндән һуң, миҫалдар, йәғни һүҙбәйләнештәр, менән тәьмин ителде. Баш һүҙ итеп барлыҡ һүҙ төркөмдәре лә алынды. Миҫалдар:

1. Исем бер ниндәй грамматик тамғаһыҙ төп килештә, берлектә бирелде:

çocuk бала, сабый; **çocuk arabası** бала арбаһы; **çocuklar bahçesi** балалар баҡсаһы; **çocuğa ad koymak** балаға исем ҡушыу.

2. Сифат бер ниндәй грамматик тамғаһыҙ алынды:

ağır ауыр, ҡыйын; **ağır yük** ауыр йөк; **ağır iş** ҡыйын эш; **ağır söz** ауыр һүҙ.

3. Рәүеш бер ниндәй грамматик тамғаһыҙ алынды:

sonra һуңынан, аҙаҡтан; **sonra ne oldu?** һуңынан нимә булды?

4. Алмаш, уның төркөмсәләре шулай уҡ бер ниндәй грамматик тамғаһыҙ алынды:

ben мин; **biz** беҙ; **biz Ankaraya uçuyoruz** беҙ Анкараға осабыҙ.

5. Һан, уның төркөмсәләре лә баш һүҙ итеп бер ниндәй тамғаһыҙ бирелде:

on ун; **on çocuk** ун бала; **on yumurta** ун йомортҡа

onuncu унынсы; **onuncu kat** унынсы ҡат.

6. Ҡылым инфинитив формаһында, йәғни **-mak, -mek** ялғауҙары ярҙамында бирелде:

binmek менеү, ултырыу; **ata binmek** атҡа менеү; **uçağa binmek** самолетҡа ултырыу.

7. Киҫәксәләр, бәйләүестәр һәм ымлыҡтар грамматик тамға менән алынды.

8. Омонимдар, йәғни яҙылышы һәм әйтелеше тап килгән, әммә мәғәнәләре менән айырылған һүҙҙәр, айырым оҙон рим цифрҙары менән бирелде:

boy I 1. буй; **boyu kısa** буйы ҡыҫҡа

2. бейеклек; **ağacın boyu** ағастың бейеклеге

3. оҙонлоҡ; **ömür boyu** ғүмер оҙонлоғо

boy II ырыу, ҡәбилә

9. Төп мәғәнәгә тап килмәгән һүҙбәйләнештәр, шулай уҡ әйтемдәр, мәҡәлдәр, фразеологик берәмектәр һүҙ аяһының аҙағында ◊ тамғаһынан һуң бирелде.

Миҫалдар: **söz** һүҙ;...◊ **sözün doğrusunu çocuk söyler** бала бар ерҙә бур ятмаҫ (һүҙҙең дөрөҫөн бала һөйләр)

serçe турғай;...◊ **serçeden korkan darı ekmez** синерткәнән ҡурҡҡан иген икмәҫ (турғайҙан ҡурҡҡан тары икмәҫ)

sürü көтөү;...◊ **sürüden ayrılan koyunu kurt kapar** бүленгәнде бүре ашар (көтөүҙән айырылған ҡуйҙы бүре ашар)

inek һыйыр;...◊ **sen ağa, ben ağa bu ineği kim sağa?** Һин дә мулла, мин дә мулла — аткa бесән кем һала? (Һин әфәнде, мин әфәнде — был һыйырҙы кем һауыр?)

ФАЙҘАЛАНЫЛҒАН ӘҘӘБИӘТ (төп сығанаҡтар)

1. Türkçe sözlük. Beşinci baskı. Hazırlıyan Ali Ağakay. Ankara: Türk Dil Kurumu yayınları. 1973.

2. Türkçe-Rusça sözlük. Denetleyenler: E. M. -E. Mustafayev ve L. N. Starostov. Moskova: «Russkiy yazık» yeyınevi. 1977.

3. Türkçe sözlük (I, II). Ankara. 1988.

4. Rusça-Türkçe sözlük. Hazırlıyan V. G — Çerbinin. Moskova: «Ruskiy yazık» yayınevi. 1989.

5. Башҡортса-русса һүҙлек. М., 1958.

6. Башҡорт теленең һүҙлеге. (I, II). М., 1993.

7. Русса-башҡортса һүҙлек. М., 1964.

8. Төрөк теле дәреслеге. М.: «МИВ» нәшриәте, 1979.

ШАРТЛЫ ҠЫҪҠАРТМАЛАР

анат.	анатомия
биол.	биология
бот.	ботаника
бәйл.	бәйләүес
геол.	геология
дини	дини һүҙ
зоол.	зоология
киҫ.	киҫәксә

күсм.	күсмә мәгәнә
лингв.	лингвистика
мат.	математика
мед.	медицина
мод.	модаль һүз
поэзия	поэзия
радио	радиотехника
сыг. к.	сыганак килеш
сәнг.	сәнгәт
спорт	спорт
теркәу.	теркәүес
тех.	техника термины
төб. к.	төбәү килеш
төш. к.	төшөм килеш
у.-в. к.	урын-вакыт килеш
филос.	философия
хим.	химия
хәрби	хәрби термин
эй. к.	эйәлек килеш
әдәб.	әдәбиәт термины
юр.	юридик термин

TÜRK ALFABESÍ

ТӨРӨК АЛФАВИТЫ

Төрөк теленең алфавиты 29 хәрефтән тора

Төрөк хәрефтәре	Хәрефтең исеме	Әйтелеше	Төрөк хәрефтәре	Хәрефтең исеме	Әйтелеше
Aa	а	а	Mm	ме	м
Bb	бе	б	Nn	не	н
Cc	дж	дж	Oo	о	о
Çç	че	ч	Öö	ө	ө
Dd	де	д	Pp	пе	п
Ee	е	е	Rr	ре	р
Ff	фе	ф	Ss	се	с
Gg	ге	г гъ	Ş ş	ше	ш
Ğ ğ	йомшаҡ ге	гъ	Tt	те	т
Hh	хе	х(h)	Uu	у	у
Iı	ы	ы	Üü	ү	ү
Íi	и	и	Vv	ве	в
Jj	же	ж	Yy	йе	й
Kk	ке	к, къ	Zz	зе	з
Ll	ле	л, ль			

A

abide һәйкәл, монумент; **harp şehitleri abidesi** һуғыш ҡорбандары һәйкәле

acar 1. көслө, ғәйрәтле, ҡеүәтле; **acar rüzgar** көслө ел 2. батыр, ҡыйыу; **acar yiğit** батыр егет

acele ашығыс, ҡабалан; **acele iş** ашығыс эш

acı 1. әсе *(тәм);* **biber acısı** борос әсеһе 2. *күсм.* ҡайғы, хәсрәт, ғазап; **yürek acısı** йөрәк ғазабы; **gönül acısı** күңел ғазабы 3. *күсм.* үҙәккә үтерлек, әсе; **acı soğuk** әсе һыуыҡ

acıklı ҡайғылы, көйөнөслө, хәсрәтле; **acıklı haber** ҡайғылы хәбәр

acıkmak ашағы килеү, асығыу; **karnım acıktı** ҡарыным асыҡты

açı *мат.* мөйөш; **dik açı** тура мөйөш; **geniş açı** йәйенке мөйөш

açık 1. асыҡ; **açık deniz** асыҡ диңгеҙ; **açık mektup** асыҡ хат 2. аяҙ **bugün hava açık** бөгөн көн аяҙ

açılmak асылыу; **kapı açıldı** ишек асылды

açlık аслыҡ; **açlıktan ölmek** аслыҡтан үлеү

açmak 1. асыу; **okul açmak** мәктәп асыу 2. соҡоу, ҡаҙыу; **çukur açmak** соҡор ҡаҙыу 3. *күсм.* иғлан итеү, асыу; **harp açmak** һуғыш иғлан итеү

ad 1. исем, атама; **adı nedir?** исеме нисек? **ad koymak** исем ҡушыу 2. дан, шөһрәт; **ad almak** дан ҡаҙаныу 3. *лингв.* исем

ada утрау

adam кеше, ир кеше, абруйлы кеше, эшмәкәр; **ilim adamı** фән эшмәкәре; **din adamı** дин эшмәкәре

âdap 1. ғөрөф-ғәҙәт; **milli âdap** милли ғөрөф-ғәҙәт 2. әҙәп, тәрбиә; **iyi âdap** яҡшы тәрбиә; **âdap görmek** тәрбиә алыу

adaş 1. аҙаш 2. *лингв.* омоним; **adaş sözler** омоним һүҙҙәр

aday кандидат; **aday göstermek** кандидат күрһәтеү

adet 1. һан; **çift adet** йоп һан; **tek adet** таҡ һан 2. дана, экземпляр; **beş adet kitap** биш дана китап

adım аҙым; **adımları geniş** аҙымдары ҙур (киң)

adil ғәҙел; **adil bir mahkeme** ғәҙел хөкөм

ağ ау; **balık ağı** балыҡ ауы

ağaç ағас; **ağaç dikmek** ағас ултыртыу

ağarmak 1. ағарыу, уңыу; **kumaşın rengi ağardı** туҡыманың төҫө уңды 2. ҡобара осоу, төҫө ҡасыу, ағарыныу; **yüzü ağardı**

төҫө ҡасты 3. таң атыу, яҡтырыу; **gün ağarıyor** көн яҡтыра башланы

ağı ағыу, ыу; **yılan ağısı** йылан ағыуы

ağılamak ағыулау, ағыу һалыу

ağır 1. ауыр; **ağır bir yük** ауыр йөк 2. ҡыйын, ҡатмарлы, ауыр; **ağır iş** ауыр эш 3. ҡиммәтле, затлы; **ağır hediyeler** затлы бүләктәр 4. тонсоу, насар, ауыр; **ağır hava** тонсоу һауа 5. *күсм.* хәтер (күңел) ҡалдыра торған, ауыр; **ağır sözler** ауыр һүҙҙәр

ağız ауыҙ; **dar ağızlı şişe** тар ауыҙлы шешә

ağızlık ауыҙлыҡ

ağlamak илау; **ağlamaktan gözleri kızarmak** илауҙан күҙҙәр(е) ҡыҙарыу

ağrımak ауырыу, һыҙлау; **başım ağrıyor** башым ауырта

ağustos август

ahır атлыҡса, мал һарайы; **ahıra çekmek** атлыҡсаға бикләү

ahir 1. аҙаҡ, һуң 2. аҙаҡҡы, һуңғы, ахыр; **ahir zaman** ахыр заман

ahit вәғәҙә, нәҙер, ант; **ahitinde durmak** вәғәҙәңдә тороу

ahitleşmek вәғәҙәләшеү, һүҙ биреү, килешеү

ahitname килешеү, договор

aile ғаилә; **çok çocuklu aile** күп балалы ғаилә; **bir aile kurmak** ғаилә ҡороу

ak аҡ, сал; **ak saç** аҡ сәс; **yumurta akı** йомортҡа ағы; **ak düşmek** аҡ төшөү *(күҙгә)*

akar ағым; **akar su** ағым һыу

akciğer *анат.* үпкә; **akciğer atardamırı** үпкә артерияһы

akıl аҡыл

akmak ағыу; **dam akıyor** түбәнән аға; ◇ **akmasa da damlar** аҡмаһа ла тамыр

aksırmak сөскөрөү

akşam аҡшам, кис; **akşam gazetesi** аҡшам гәзите

alâmet билдә, тамға; **kış alâmetleri** ҡыштың билдәләре

alan 1. майҙан, майҙансыҡ; **çocuk oyun alanı** балалар майҙансығы; **harp alanı** һуғыш. майҙаны 2. тармаҡ, өлкә, майҙан; **ilim alanında** фән өлкәһендә

alarm тревога; **askeri alarm** хәрби тревога; **yanlış alarm** ялған тревога

alatürka төрөксә, төрөк; **alatürka yemek** төрөк кухняһы (ашы)

alay 1. төркөм 2. полк; **avcı alayı** уҡсылар полкы

alçak 1. түбән, тәпәш; **alçak dağ** тәпәш тау 2. *күсм.* әшәке, ҡәбәхәт; **alçak adam** әшәке кеше

âlem донъя, ғәләм; **hayvanlar âlemi** хайуандар донъяһы

aleniyet асыҡлыҡ, билдәлелек; **aleniyet zamanı** билдәлелек заманы

alet ҡорал, ҡорамал; **tarım aletleri** ауыл хужалығы ҡорамалдары

alev ут, ялҡын; **alev almak** ялҡын ялмау

alfabe алфавит; **başkurt alfabesi** башҡорт алфавиты

alın 1. маңлай; **alın kemigi** маңлай һөйәге 2. ал яҡ, фасад

âlim ғалим; **ünlü âlim** күренекле ғалим

alkış алҡыш; **şiddetli alkışlar** көслө алҡыштар

almak алыу; **elma almak** алма алыу; **ev almak** өй алыу; **haber almak** хәбәр алыу; **izin almak** отпуск алыу; **ögüt almak** кәңәш алыу

alt 1. аҫҡы; **alt kat** аҫҡы ҡат; **alt dudak** аҫҡы ирен 2. алыҫтағы

altı алты; **altı saat** алты сәғәт; **altı defa** алты тапҡыр

altın алтын; **altın saat** алтын сәғәт

altmış алтмыш; **altmış yaş** алтмыш йәш

ama *терк.* ә, ләкин, әммә; **güneş doğdu, ama hava hâlâ soğuktur** ҡояш сыҡты, әммә һауа әле һыуыҡ

amaç маҡсат; **amaç tutmak** маҡсат тотоу; **amaçla** маҡсат менән

ambulans 1. поликлиника, амбулатория 2. ашығыс ярҙам машинаһы

amca ағай, олатай

amel 1. эш, ғәмәл, шөғөл 2. практика; **ilim ve amel** теория һәм практика

amele эшсе; **amele fırkası** эшселәр фирҡәһе

ameliyat 1. операция; **ameliyat masası** операция өҫтәле 2. практика

anahtar асҡыс; **kapı anahtarı** ишек асҡысы; **anahtarla açmak** асҡыс менән асыу

ancak тик, фәҡәт; **ancak beş dakika** фәҡәт биш минутҡа

anne әсәй; **anne sütü** әсә һөтө; **anne hayır duası** әсә фатихаһы

ant ант; **ant etmek** ант итеү

araba арба, ылау, еңел машина; **bir araba saman** бер арба һалам; **ilk yardım arabası** ашығыс ярҙам машинаһы

aramak эҙләү; **telefonla aramak** телефондан эҙләү

arazi ер; **arazi beyi** ер биләүсе

arı бал ҡорто; **ana arı** инә ҡорт

arıcılık ҡортсолоҡ; **arıcılıkla uğraşmak** ҡортсолоҡ менән шөғөлләнеү

arkadaş дуҫ, иптәш, әшнә; **okul arkadaşı** мәктәп дуҫы

artık артыҡ, ҡалдыҡ; **yemek artığı** икмәк ҡалдығы

asır, yüzyil быуат; **geçen asır** үткән быуат

asker һалдат, хәрби хеҙмәт; **askere gitmek** хәрби хеҙмәткә китеү

aslan арыҫлан; **erkek aslan** ата арыҫлан; **dişi aslan** инә арыҫлан

astar аҫтар, эслек; **palto astarı** пальто эслеге

aş аш-һыу, ашамлыҡ; **aş evi** аш-һыу бүлмәһе, кухня

aşağı аҫ яҡ, аҫҡы, түбәнге; **aşağı kat** түбәнге ҡат

aşçı ашнаҡ

âşık ғашиҡ; **bir kıza aşık** бер ҡыҙға ғашиҡ

at ат; **ata binmek** атҡа атланыу; **at kılı** ат ҡылы

atar пульс; **atarı atmak** пульсы һуғыу

ateş ут, янғын, эҫелек, ҡыҙыулыҡ; **ateş koymak** ут төртөү; **ateş çıktı** янғын сыҡты; **ateşi düştü** ҡыҙыулығы төштө

av һунар; **av köpeği** һунар эте; **ava çıkmak** һунарға сығыу

avuç ус; **avuçum gidişiyor** усым ҡысыта

ay ай; **ağustos ayı** август айы; **ay aydınlığı** ай яҡтыһы; **ay doğdu** ай тыуҙы

aya ус, ая; **el ayası** ҡул аяһы

ayak 1. аяҡ; **ayak tabanı** аяҡ табаны; **ayağına giymek** аяғына кейеү 2. баҫана; **köprünün ayakları** күпер баҫанаһы

ayakkabı аяҡ кейеме

ayaz аяҙ; **ayaz gün** аяҙ көн; **ayaz olmak** аяҙ булыу

aydınlık яҡты, яҡтылыҡ; **ay aydınlığı** ай яҡтыһы

ayı айыу; **erkek ayı** ата айыу; **dişi ayı** инә айыу; **kutup ayısı** ҡотоп айыуы

ayna көҙгө; **el aynası** ҡул (кеҫә) көҙгөһө

ayran айран; **ayran içmek** айран эсеү

az әҙ; **az miktarda** әҙ миҡдарҙа (һанда)

azap ғазап, яфа, ыҙа; **azap çekmek** ғазап сигеү

azat азат; **azat etmek** азат итеү

azgın 1. ҡоторған; **azgın köpek** ҡоторған эт 2. аҙғын; **azgın bir boğa** аҙғын үгеҙ

azık аҙыҡ; **azık dükkanı** аҙыҡ магазины

azili йыртҡыс, ҡырағай; **azili hayvanlar** йыртҡыс хайуандар

aziz ғәзиз; **aziz anne** ғәзиз әсәй; **aziz çocuk** ғәзиз бала

B

baba атай; **baba evi** атай йорто; **benim babam Doktor** минең атайым табип

bagır 1. түш 2. *күсм.* йөрәк, бәғер; **bağrına basmak** йөрәгенә баҫыу

bağırsak эсәк ◇ **bağırsak tıkanması** эс ҡатыу

bağlam бәйләм, ҡосаҡ, ус, көлтә; **bir bağlam ekin** бер көлтә ашлыҡ

bağlamak бәйләү; **boyunbağı bağlamak** галстук бәйләү

bahar яҙ; **bahar oldu** яҙ килде

bahçe баҡса; **elma bahçesı** алма баҡсаһы; **çocuk bahçesı** балалар баҡсаһы

bakan министр; **bakanlar kurulu** министрҙар советы; **maliye bakanı** финанс министры

bakanlık министрлыҡ; **Maarif Bakanlığı** Мәғариф министрлығы

bakmak ҡарау, тәрбиәләү; **hastaya bakmak** ауырыуҙы ҡарау

bal бал; **bal başı** тәүге бал; **bal peteği** бал кәрәҙе

baldır балтыр; **ayak baldırı** аяҡ балтыры

balık балыҡ; **balık ağı** балыҡ ауы; **balık avlamak** балыҡ тотоу

balta балта; **balta sapı** балта һабы

banyo ванна; **güneş banyosu** ҡояш ваннаһы; **kum banyosu** ҡом ваннаһы; **banyo almak** ванна инеү

bap 1. ишек, ҡапҡа 2. глава, бүлек; **üçüncü bap** өсөнсө бүлек

bardak стакан, кружка; **bir bardak süt** бер стакан һөт

barut дары; **barut dumanı** дары төтөнө; **barut çamuru** дары еҫе

basamak баҫҡыс, баҫма; **en yüksek basamak** иң бейек баҫҡыс

basım 1. китап баҫыу 2. типография

basın матбуғат, пресса

baskıç, merdiven баҫҡыс

basmak 1. баҫыу, йөрөү, атлау; **ayaklarının uçlarına basmak** аяҡ осона баҫыу 2. башланыу; **karanlık bastı** ҡараңғы төштө; **ay bastı** ай башланды

baston таяҡ; **baston ucu** таяҡ осо

baş 1. баш; **baş çanağı** баш һөйәге; **başım ağrıyor** башым ауырта 2. башлыҡ, хужа кеше, етәксе; **başına geçmek** етәксе булыу

başak башаҡ; **başak bağlamak** башаҡ ебәреү

başlamak 1. башлау; **okula başlamak** мәктәпкә йөрөй башлау 2. башланыу; **okul bugün başladı** бөгөн уҡыу башланды

başlangıç 1. башланғыс, баш; **başlangıçtan beri** баштан бирле 2. инеш, инеш мәҡәлә

başlık 1. башлыҡ, каска, шлем; **çelik başlık** ҡорос каска (башлыҡ) 2. етәксе (баш) кеше; **bu işe başlığı o yapıyor** был эштең етәксеһе ул

batak 1. батҡаҡ, батҡаҡлыҡ; һаҙ, һаҙлыҡ 2. *күсм.* юғалған, елгә осҡан; **batak para** елгә осҡан аҡса

batı көнбайыш; **batı sınırı** көнбайыш сиге; **batı memleketleri** көнбайыш илдәре

batmak батыу; **suya batmak** һыуға батыу

bavul сумаҙан; **bir bavul kitap** бер сумаҙан китап

bay бай, әфәнде; **sayın Bay Ahmet** хөрмәтле Әхмәт әфәнде

bayağı ябай, ғәҙәти; **bayağı gün** ғәҙәти көн

baygın һуштан яҙған, аңын юғалтҡан; **yarı baygın bır halde** һуштан яҙған килеш

baygınlık һуштан яҙыу, аң юғалтыу хәле; **baygınlık geçirmek** аңын юғалтыу

baykuş өкө; **baykuş gagası** өкө суҡышы

bayrak флаг, байраҡ; **kırmızı bayrak** ҡыҙыл байраҡ; **yeşil bayrak** йәшел байраҡ

bayram байрам, таңтана; **Bayramınızı kutlarım!** Байрам менән ҡотлайым! **Cumhuriyet bayramı** Республика байрамы; **bayram etmek** байрам итеү

baz база, нигеҙ; **üretim bazı** производство базаһы

bazan, bazen бәҙзе (ҡайһы) ваҡыт

bed насар, шәп түгел, хөрт

bedava буш, бик арзан; **bedavaya almak** арзанға алыу

bedel хаҡ, баһа; **bilet bedeli** билет хаҡы

beden кәүҙә, тән, организм; **beden cezası** тән язаһы; **beden terbiyesi** физик тәрбиә

bekar буйҙаҡ; **koca bekar** ҡарт буйҙаҡ

bekçi ҡарауылсы; **bekçi evi** ҡарауылсы өйө

bel бил; **beli ince** нәҙек билле; **bel kuşağı** билбау

bela бәхетһеҙлек, бәлә-ҡаза, бәлә; **belaya düşmek** бәләгә ҡалыу

belge документ, расписка; **belge almak** расписка алыу

belirli билгеле; **belirli gün** билгеле көн

belki бәлки; **belki de hiç gelmez** бәлки ул бөтөнләй килмәҫ

bellek хәтер; **bellekten silinmek** хәтерҙән сығыу

ben I мин; **ben değil** мин түгел; **ben öğretmenim** мин уҡытыусымын

ben II миң; **siyah ben** ҡара миң

bende ҡол, ялсы

benzer оҡшаш; **benzer şekiller** оҡшаш фигуралар

beraber бергә, күмәкләп; **beraber geldik** бергә килдек

berber парикмахер; **berber dükkanı** сәсалыҡ (парикмахерская); **berber salonu** сәсалыҡ салоны; **otelde berber var mı?** ҡунаҡханала сәсалыҡ бармы?

bereket бәхет, рәхәт тормош, бәрәкәт, муллыҡ; **bereket harekette** хәрәкәттә бәрәкәт

beş биш; **beş saat** биш сәғәт; **beş yaş** биш йәш; **beş parmak** биш бармаҡ

beşik бишек, сәңгелдәк

bet бит; **bet beniz** бит төҫө; **beti benzi atmak** аҡарыныу

beyan 1. әйтеп (яҙып) аңлатыу, аңлатма; **beyan ilmi** риторика **2.** ғариза, декларация

beyaz аҡ; **beyaz yüzlü** аҡ йөҙлө; **beyaz boya** аҡ буяу

beyin 1. *анат.* мейе 2. аҡыл, аң, иҫ

beylik 1. дәүләт, ҡаҙна; **beylik bina** дәүләт бинаһы

bez I 1. бәҙ, туҡыма; **branda bezi** брезент, ҡалын киндер; **gaz bezi** тюль, газ 2. сепрәк; **toz bezi** туҙан сепрәге

bez II биҙ; **tükürük bezleri** шайыҡ биҙҙәре; **yağ bezleri** май биҙҙәре

bezek биҙәк; **pembe bezek** зәңгәр биҙәк

bıçak бысаҡ; **bıçak sırtı** бысаҡ һырты; **bıçak yüzü** бысаҡ йөҙө

bırakmak 1. ташлау; **sigarayı bırakmak** тәмәке ташлау 2. һалыу, ҡалдырыу; **parayı bankaya bırakmak** аҡсаны банкыға һалыу 3. ысҡындырыу; **çocuğun kolunu bırakmak** баланы ҡулдан ысҡындырыу

bıyık мыйыҡ, мыйыҡса *(йәшелсәләргә ҡарата)*; **bıyık bırakmak** мыйыҡ ебәреү (үҫтереү)

bildiri иғлан; **bildiri yazmak** иғлан яҙыу

bildi белеш, мәғлүмәт, информация

bilim фән, ғилем

bilmek 1. белеү, таныу; **yazabilmek** яҙа белеү; **iyilik bilmek** яҡшылыҡты таныу 2. иҫәпләү; **ben onu dost biliyordum** мин уны дуҫ тип иҫәпләнем

bin мең; **bin lira** мең лира

binmek менеү, атланыу, ултырыу; **ata binmek** аттҡа атланыу; **uçağa binmek** самолетҡа ултырыу

bir бер; **bir elma** бер алма; **bir insan** бер кеше

bira һыра; **bira fabrikası** һыра заводы

birahane һырахана

birim берәмек; **uzunluk birimi metredir** оҙонлоҡ берәмеге — метр; **para birimi** аҡса берәмеге

birinci беренсе, **birinci sınıf** беренсе синыф

birleşmek берләшеү

birleşmiş; Birleşmiş Milletler kurumu Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы

bitki үҫемлек; **bitki yağları** үҫемлек майҙары

bitmek бөтөү, тамам булыу; **yapi bitti** төҙөлөш тамамланды

biz I беҙ; **bizlerden biri** беҙҙең береҙ

biz II беҙ; **kunduracı bizi** итек беҙе

boğa үгеҙ; **boğa eti** үгеҙ ите

boğaz 1. *анат.* тамаҡ, йотҡолоҡ; **boğaz hastalığı** тамаҡ ауырыуы 2. боғаҙ, муйын; **şişenin boğazı** шешәнең муйыны

boğazlamak боғаҙлау, һуйыу; **inek boğazlamak** һыйыр һуйыу

boğmak быуыу; **iple boğmak** еп менән быуыу

boğum быуын, төйөн; **sinir boğumları** нервы төйөндәре

bol киң, иркен, ҙур, мул; **bol ayakkabı** иркен аяҡ кейеме; **bol elbise** киң күлдәк

bolluk киңлек, иркенлек, муллыҡ, байлыҡ; **bolluk içinde yaşamak** байлыҡ эсендә йәшәү

borc бурыс; **borc almak** бурыҫҡа алыу; **borcunu kapatmak** бурысты түләү; **borca batmak** бурыҫҡа батыу

boru торба; **soba borusu** мейес торбаһы; **petrol borusu** нефть торбаһы

bostan йәшелсә баҡсаһы, баҡса

boş буш; **boş ev** буш өй; **boş vakit** буш ваҡыт; **boş adam** буш кеше; **boş söz** буш һүҙ

boşluk 1. бушлыҡ; **uzay boşluğu** йыһан бушлығы 2. ҡыуышлыҡ; **ağız boşluğu** ауыҙ ҡыуышлығы

boy I буй; **boy almak** буйға үҫеү; **ömür boyu** ғүмер буйы

boy II ырыу, ҡәбилә, нәҫел; **bizim boyumuzdan insanlar** беҙҙең ырыу кешеләре

boya буяу; **sulu boya** акварель буяу; **yağlı boya** майлы буяу

boyamak буяу; **kumaşı siyaha boyamak** туҡыманы ҡараға буяу (маныу)

boyun муйын; **boyun atkısı** шарф

boz буҙ, һоро; **boz ayı** һоро айыу; **bozkurt** һоро бүре; **kızıl boz** ерән *(атҡа ҡарата)*

bozmak боҙоу; **ant bozmak** антты боҙоу; **iş bozmak** эш боҙоу

bozuk боҙоҡ; **bozuk makine** боҙоҡ машина; **bozuk adam** боҙоҡ кеше

böbrek *анат.* бөйөр ◊ **böbrek taşı** бөйөр ташы

böcek бөжәк; **böcek yumurtası** бөжәк йомортҡаһы

bölge район, зона, округ, пояс; **sanayi bölgesi** промышленность районы

bölük киҫәк, өлөш, төркөм; **bir bölük halk** бер төркөм халыҡ

bölüm бүлек; **dil bölümü müdürü** тел бүлеге мөдире

bu был; **bu günlerde** был көндәрҙә; **bu kız** был ҡыҙ

bucak мөйөш; **dik bucak** тура мөйөш

buçuk ярты, ярым; **bir buçuk** берәү ярым; **dört buçuk** дүрт ярым; **saat iki buçuk** сәғәт өсөнсө ярты

budak ботаҡ; **ağaç budağı** ағас ботағы

buğday бойҙай; **kış buğdayı** ужым бойҙайы; **buğday lapası** бойҙай бутҡаһы

buğu буу; **buğu bağlamak** буланыу *(тәҙрәгә ҡарата)*

bugün бөгөн; **bugün hava sıcak** бөгөн көн эҫе; **bugün hava kötü** бөгөн көн насар

bugünkü бөгөнгө, хәҙерге; **bugünkü dil** хәҙерге тел

buhar пар, буу; **buhar kazanı** пар ҡаҙаны; **buhar gemisi** пароход

buhran кризис; **sanayi buhranı** промышленность кризисы; **buhran geçirmek** кризис кисереү

bulanık болғансыҡ; **bulanık su** болғансыҡ һыу

bulaşmak бысраныу; **çamura bulaşmak** батҡаҡҡа бысраныу

bulut болот; **bulutlar açıldı** болоттар таралды (асылды)

bura был урын, был ер

burada был урында, бында; **burada şifalı su kaynakları var** бында шифалы шишмәләр (сығанаҡтар) бар

burçak борсаҡ; **burçak ekmek** борсаҡ сәсеү

burmak бороу; **bıyık burmak** мыйыҡ бороу

burun танау, морон; **burun deliği** танау тишеге; **burun silmek** танау һөртөү

buruş йыйырсыҡ; **derin buruşlar** тәрән йыйырсыҡтар

buruşmak йыйырсыҡ менән ҡапланыу, йыйырсыҡланыу; **alın buruşmak** маңлай йыйырсыҡланыу

buruşuk йыйырсыҡлы, борсолған, тәпәрләнгән, таушалған; **buruşuk eller** йыйырсыҡлы ҡулдар; **buruşuk kumaş** таушалған туҡыма

but бот; **kuzu butu** һарыҡ бото

buz боҙ; **buz bağlamak** боҙ менән ҡапланыу; **buz kütlesi** айсберг

buzağı быҙау; **inek buzağısı** һыйыр быҙауы

bülbül былбыл; **bülbül ötüşü** былбыл һайрауы

bütün бөтөн, бар, барыһы; **bütün çocuklar** бар балалар

büyük эре, ҙур; **büyük arsa** ҙур участок; **büyük baş** эре баш мал

büyüklük 1. эрелек, ҙурлыҡ 2. киң (хуш) күңеллелек, саф күңелле булыу; **büyüklük göstermek** хуш күңеллелек күрһәтеү

C

cadde проспект, урам; **Salavat caddesi** Салауат урамы

cahil белемһеҙ, тупаҫ, наҙан, ҡара; **cahil bir halk** ҡара халыҡ

cam быяла; **kırılmaz cam** ватылмай торған быяла; **pencere camı** тәҙрә быялаһы; **cam dökmek** быяла ҡойоу

cami мәсет; **cami minaresi** мәсет манараһы

can 1. йән, рух 2. ғүмер, йәшәү; **can ve mal emniyeti** баш һәм мал именлеге

canlanmak йәнләнеү; **yağmurdan sonra ekinler canlandı** ямғырҙан һуң игендәр йәнләнеп китте

canlı йәнле, тере; **canlı balık** тере балыҡ

cefa ыҙа, яфа, ғазап; **cefa çekmek** яфа сигеү; **cefa görmek** яфа күреү

cehennem йәһәннәм; **cehennem azabı** йәһәннәм ғазабы

cemaat йәмәғәт, халыҡ, **köy cemaati** ауыл халҡы

cenaze үлек кәүҙә, мәйет; **cenaze kaldırma** мәйет сығарыу; **cenaze yıkamak** мәйет йыуыу

cennet 1. ожмах, йәннәт; **cennet bahçesi** йәннәт баҡсаһы 2. *кусм.* матур тормош

cenup көньяҡ, көньяҡ йүнәлеш

cep кеҫә; **cep saatı** кеҫә сәғәте; **mendil cebi** ҡулъяулыҡ кеҫәһе

cereyan ағым, ағыш; **hava cereyanı** һауа ағымы

cerrah хирург; **cerrah bıçağı** хирург бысағы

cetvel таблица, йәҙүәл, расписание; **tren cetveli** поезд расписаниеһы

cev атмосфера, йыһан

cevap яуап; **cevap vermek** яуап биреү

cevaz рөхсәт; **cevaz vermek** рөхсәт биреү

cevdet яҡшылыҡ, йомартлыҡ

cevher 1. руда; **bakır cevheri** баҡыр рудаһы; **demir cevheri** тимер рудаһы; **faydalı maden cevherleri** файҙалы ҡаҙылмалар 2. матдә

cevherci ювелир; **cevherci dükkânı** ювелир магазины

ceviz сәтләүек; **ceviz ağacı** сәтләүек ағасы

ceza яза; **ceza kesmek** штраф һалыу

cılız көсһөҙ, хәлһеҙ, сибек; **cılız çocuk** сибек бала

cılk 1. һаҫыҡ, серек; **cılk yumurta** серек йомортҡа 2. эренле; **cılk yara** эренле яра

ciddi етди; **ciddi bir çalışma** етди эш; **ciddi bir hastalık** ҡурҡыныслы ауырыу

ciğer 1. бауыр 2. үпкә; **ciğer hastalığı** үпкә ауырыуы

cihan ер, йыһан, донъя; **cihan harbi** донъя һуғышы

cihaz прибор, аппарат, аппаратура; йыһаз; **tibbî cihazlar** медицина йыһаздары

cihet 1. йүнәлеш, яҡ, тараф; **her cihetten** төрлө яҡтан 2. ҡараш; **bu cihetten** был ҡараштан (йәһәттән)

cilasun батыр, ҡаһарман, ҡыйыу; **cilasun adam** ҡыйыу кеше

cilt тире; **cilt hastarlığı** тире ауырыуы

cimri һаран, ҡомһоҙ; **cimri adam** ҡомһоҙ кеше

cinas һүҙ уйнатыу, каламбур; **söz cinası** һүҙ уйнатыу

cinayet енәйәт; **cinayeti ispat** енәйәтте иҫбатлау **cinayet bilim** криминология

cins 1. төр, сорт, тип 2. тоҡом, нәҫел; **bir cins at** бер тоҡомдағы ат 3. енес, зат; **cinsi latif** йомшаҡ зат; **dişi cins** ҡатын-ҡыҙҙар заты

cinsi енси; **cinsi hayat** енси бәйләнеш

cisim есем

cop таяҡ, һуйыл; **copu basmak** таяҡ менән дөмбәҫләү

coşkun 1. ҡайнар, ҡыҙыу, ярһыу, дәртле; **coşkun faaliyet** ҡайнар эшмәкәрлек 2. ярһыған, тулҡынланған **coşkun gönül** ярһыған йөрәк

coşmak 1. яңһыу, тулҡынланыу 2. ҡыҙа барыу, көсәйтеү; **yağmur yine coştu** ямғыр йәнә көсәйҙе

cömert йомарт, киң күңелле; **cömert adam** киң күңелле кеше; **cömert toprak** йомарт тупраҡ

cuma йома; **cuma namazı** йома намаҙы

cumartesi шәмбе

cumhuriyet республика; **muhtar cumhuriyet** үҙ аллы республика; **Türkiye Cumhuriyeti** Төрөк республикаһы

cümle I һөйләм; **bağımsız cümle** баш һөйләм; **basit cümle** ябай һөйләм

cümle II бары, барыһы, бөтә, бөтәһе; **cümle alem** бөтә донъя

cüret ҡыйыулыҡ, батырлыҡ, батырсылыҡ; **cüret etmek** батырсылыҡ итеү

Ç

çaba көсөргәнеш, көс, тырышлыҡ; **çaba harcamak** көс һалыу

çabalamak көс һалыу, тырышлыҡ күрһәтеү; **boş yere çabalamak** бушҡа көс һалыу

çabuk тиҙ, етеҙ, шәп, йәһәт, йыш; **çabuk solumak** йыш тын алыу

çabuklaştırmak тиҙләтеү, йәһәтләтеү

çağ 1. мәл, саҡ, ваҡыт; **akşam çağı** киске мәл 2. эпоха, заман; **atom çağı** атом заманы

çağdaş замандаш

çağırma саҡырыу; **çağırma zili** саҡырыу тауышы

çağırmak саҡырыу; **düğüne çağırmak** туйға саҡырыу; **hastaya doktor çağırmak** ауырыуға доктор саҡырыу

çalış туҡылдаған, шаҡылдаған тауыш

çalışkanlık эш һөйөүсәнлек, тырышҡанлыҡ

çalışma эш, хеҙмәт; **çalışma odası** эш бүлмәһе

çalışmak эшләү, хеҙмәт итеү; **öğretmen olarak çalışmak** уҡытыусы булып эшләү

çalkama; çalkalama туғыу; **çalkama ayran** туғылған айран

çam ҡарағай; **ak çam** аҡ ҡарағай; **dağ çamı** тау ҡарағайы; **çam ormanı** ҡарағай урманы

çamaşır 1. яҫтау ҡаралтыһы 2. эске күлдәк 3. кер, йыуылған кер; **çamaşır makinesi** кер йыуыу машинаһы; **çamaşır sabunu** кер һабыны

çamur быраҡ, батҡаҡ; **çamura batmak** батҡаҡҡа батыу

çan ҡыңғырау; **çan tokmağı** ҡыңғырау теле; **çan çalmak** ҡыңғырау ҡағыу

çanak балсыҡ һауыт, миҫкә; **süt çanağı** һөт һауыты

çanta сумка, портфель, сумаҙан; **sırt çantası** арҡаға аҫа торған тоҡ, артмаҡ; **el çantası** ҡул сумкаһы

çapar I сапҡын, ҡыуғынсы, курьер, почтальон; **çapar çantası** почтальон сумкаһы

çapar II кәмә, баркас

çaparız ҡаршылыҡ, кәртә; **çaparız vermek** ҡыйынлыҡ тыуҙырыу

çapul талау, юл баҫыу; **çapul etmek** талау

çaput иҫке-моҫко сепрәк; **çaput olmak** иҫкереп сепрәккә әйләнеү

çare сара, ысул, юл; **çare aramak** сара эҙләү

çaresizlik сараһыҙлыҡ

çark тәгәрмәс; **çark çevresi** тәгәрмәс тирәсе; **çarka kapılmak** тәгәрмәс аҫтына ҡалыу

çarpık кәкре, салыш, ҡыйыш; **çarpık ökçeler** ҡыйыш үксәләр

çarpılmak 1. кәкрәйеү, салышайыу, ҡыйшайыу 2. асыулаҡыу, үпкәләү

çarpınmak 1. ҡаушау, тулҡынланыу, өтәләнеү 2. үрһәләнеү, өҙгөләнеү

çarşaf түшәк-яҫтыҡ тышлығы; **yatak çarşafı** аҡйәймә; **yorgan çarşafı** юрған тышлығы

çarşamba шаршамбы

çatal 1. сата, аса; **ağaç çatalı** ағас сатаһы 2. сат, айырса; **yol çatalı** юл саты 3. сәнскә; **gümüş çatal** көмөш сәнскә

çatı бура, каркас, һөлдә; **uçak çatısı** фюзеляж

çatlak сатнаған, шартлаған, ярылған; **çatlak bardak** сатнаған стакан

çatlamak сатнау, шартлау, ярылыу; **dudakları çatladı** уның ирендәре ярылған

çavdar арыш; **çavdar ekmeği** арыш икмәге; **çavdar ekmek** арыш сәсеү

çay I йылға; **çay yolu** йылға үҙәне (йырҙаһы)

çay II сәй; **çay içmek** сәй эсеү; **çay koymak** сәй ҡойоу

çayevi сәйхана

çayır 1. болон, туғай, аҡлан 2. туғай (аҡлан) үләне; **çayır biçmek** бесән сабыу *(туғайҙа)*

çeç өйөм, көшөл *(игенгә ҡарата)*; **buğday çeçi** бойҙай өйөмө

çehre бит, йөҙ; **manevi çehre** эхләҡи йөҙ

çeki ауырлыҡ, йөк; **bir çeki odun** бер йөк утын

çekiç сүкеш; **demirci çekici** тимерсе сүкеше; **orakla çekiç** ураҡ менән сүкеш

çekidüzen тәртип, йыйнаҡлыҡ; **odada çekidüzen kalmadı** өйҙә тәртип ҡалманы; **işlere çekidüzen vermek** эштәрҙе тәртипкә килтереү

çekingen оялсан, тартынысан, баҙау; **çekingen kız** оялсан ҡыҙ

çekinmek оялыу, тартыныу; **çekinecek bir şey yok!** оялырлыҡ бер нәмә юҡ!

çekirdek 1. ем, емеш, орлоҡ, төш, һөйәк; **erik çekirdeği** өрөк һөйәге **2.** ядро; **atom çekirdegi** атом ядроһы

çekirge kuşu сыйырсыҡ; **çekirge kuşu yuvası** сыйырсыҡ ояһы

çekmek тартыу, һөйрәү; **araba çekmek** арба һөйрәү

çelgi баш яулығы; **ipek çelgi** ебәк яулыҡ

çelik ҡорос; **çelik eritmek** ҡорос иретеү

çelişik ҡапма-ҡаршы; **çelişik bir söz** ҡапма-ҡаршы һүҙ

çeltik *(таҙартылмаған)* дөгө; **çeltik değirmeni** дөгө тирмәне; **çeltik tarlası** дөгө баҫыуы (плантация); **çeltik samanı** дөгө һаламы; **çeltik ekmek** дөгө сәсеү

çember 1. *мат.* түңәрәк **2.** тирәс, ҡоршау; **elek çemberi** иләк тирәсе

çene эйәк; **çene kemiği** эйәк һөйәге

çenebaz күп һөйләүсән, ләпелдәк; **çenebaz çocuk** ләпелдәк бала

çentmek ҡырҡыу, турау, ваҡлау; **lahana çentmek** кәбеҫтә турау; **soğan çentmek** һуған турау

çepel быраҡ, әшәке, насар; **çepel yol** быраҡ юл; **çepel hava** насар һауа; **çepel adam** әшәке кеше

çerçeve рам; **pencere çerçevesi** тәҙрә рамы

çeri һалдат, һуғышсы, ғәскәр, армия; **çeri düzmek** ғәскәрҙе яуға күтәреү

çeşit сорт, төр; **çeşitlere ayırmak** сорттарға айырыу

çetin 1. ҡаты, ярып булмай торған; **çetin ceviz** ҡаты сәтләүек **2.** ауыр, ҡатмарлы; **çetin günler** ауыр көндәр

çetrefil ауыр, буталсыҡ, ҡатмарлы; **çetrefil bir dava** ауыр эш (мәсьәлә)

çevik еңел, хәрәкәтсән, етеҙ, өлгөр, сапсан; **ayağına çevik** йөрөүгә етеҙ

çeviz бирнә; **çeviz düzmek** бирнә әҙерләү

çeyrek сирек; **çeyrek asır** сирек быуат; **bire çeyrek var** ун биш минуттан бер

çıban шешек, күпертке, баҙана *(бармаҡ араһында)*, һыҙлауыҡ, сиҡаҡ; **çıban çıkmak** сиҡаҡ сығыу

çıdamak түҙеү, сыҙау; **çetinlige çıdamak** ауырлыҡҡа түҙеү

çıdamlı түҙемле, сыҙамлы; **çıdamlı çocuk** сыҙамлы бала

çığır һуҡмаҡ, юл; **geleçeğe çığır açmak** киләсәккә юл асыу

çığrış шау-шыу

çığrışmak ҡысҡырышыу

çıkarım десант

çıkarmak сығарыу, һурып (бороп) сығарыу; **ampulü çıkarmak** лампаны бороп алыу; **çıvi çıkarmak** сөйҙө һурып сығарыу; **dişini çıkarmak** теште һурып сығарыу

çıkı төйөнсөк; **yemek çıkısı** аҙыҡ төйөнсөгө

çıkık тайған, быуыны сыҡҡан; **ayağı çıkıktır** уның аяғы тайған

çıkış сығыш (сыға торған ишек йәки урын); **bu mağaranın iki çıkışı var** был мәмерйәнең ике сыға торған урыны бар

çıkmak сығыу; **evden çıkmak** өйҙән сығыу

çılgın аҡылһыҙ, уйланмай эшләнгән; **çılgın bir davranış** уйланмай эшләнгән эш

çınlama зың-зың итеү, сыңлау, шаулау; **kulak çınlaması** ҡолаҡ шаулауы

çınlamak зың-зың иткән тауыш сығарыу, шаулау; **kulağı çınlıyor** уның ҡолағы шаулай

çıplak яланғас, шәрә; **çıplak ağaçlar** яланғас ағастар; **çıplak adam** шәрә кеше

çıplanmak яланғасланыу, шәрәләнеү; **ağaçlar çıplandı** ағастар яланғасланды

çıra сыра; **çıra yakmak** сыра яғыу

çırpınmak дертелдәү, лепелдәү, ҡалтырау, ҡағыу *(йөрәккә ҡарата)*

çırpmak һелкеп төшөрөү, ҡағыу, һелкеү; **halı çırpmak** балаҫ ҡағыу; **kanat çırpmak** ҡанат ҡағыу

çıtçıt сыртлаҡ; **ceket çıtçıtı** куртка сыртлағы

çiçek I сәскә; **çiçek balı** сәскә балы; **kır çiçekleri** ҡыр сәскәләре

çiçek II *мед.* сәсәк; **çiçek çıkarmak** сәсәк сығарыу

çiçeklik 1. ваза **2.** сәскә түтәле, клумба

çift 1. парлы, ишле, ҡуш; **çift kürek çekme** ҡушлап ишеү **2.** йоп һан

çiğ бешерелмәгән, ҡайнатылмаған, сей; **çiğ et** сәй ит; **çiğ süt** ҡайнатылмаған һөт

çiğnemek сәйнәү, көйшәү; **çiklet çiğnemek** һағыҙ сәйнәү

çiklet һағыҙ, резинка

çil I сел *(ҡош)*; **çil tüyü** сел ҡауырһыны

çil II һипкел; **çil yüzlü** һипкел йөҙлө

çilek еләк, ер еләге; **çilek reçeli** еләк ҡайнатмаһы

çiriş елем; **çiriş ile yapıştırmak** елем менән йәбештереү

çirkin йәмһеҙ, насар, яман; **çirkin bir muamele** насар мөнәсәбәт; **çirkin bir ses** йәмһеҙ тауыш; **çirkin huy** яман холоҡ

çiy ысыҡ; **çiy düştü** ысыҡ төштө

çizgi һыҙыҡ; **dik çizgi** тура һыҙыҡ

çizim черчение; **çizim dersi** черчение дәресе

çizme итек; **lastik çizme** резина итек; **çizme kalıbı** итек ҡалыбы

çizmeci итексе

çoban көтөүсе, чабан; **çoban alacığı** чабан ҡыуышы

çocuk бала, сабый; **çocuğa ad koymak** балага исем кушыу; **çocuk bezi** бала йүргәге; **çocuk arabası** балалар коляскаһы

çocuk bilimi педагогика

çoğu күпселек

çoğulluk *лингв.* күплек һан

çok 1. күп; **çok defa** күп тапкыр 2. *киҫ.* бик; **çok çabuk** бик шәп 3. оҙак; **çok beklemek** оҙак көтөү

çoktan күптән, әллә ҡасан

çomak таяҡ, һуйыл

çorap ойоҡ; **çorap kaçmak** ойоҡтоң күҙе китеү; **ipek çorap** ебәк ойоҡ; **yün çorap** йөн ойоҡ; **kapron çorap** капрон ойоҡ

çorba һурпа; **balık çorbası** балыҡ һурпаһы, уха; **çorba pişirmek** һурпа бешереү

çotuk ағас тамыры

çökmek сүгеү, ултырыу, баҫылыу; **ev çöktü** өй ултырҙы

çöküş емерелеү, ишелеү, бүҫерелеү

çöl сүл, дала; **çöl otu** сүл үләне

çömlek сүлмәк; **süt çömleği** һөт сүлмәге

çöp 1. үлән һабағы 2. сүп-сар; **çöp sepeti** сүп кәрзине

çöplük сүплек

çöreklenmek йомарланыу

çözmek 1. сисеү, ысҡындырыу, туғарыу; **atları arabadan çözmek** ат туғарыу; **ayakkabının bağını çözmek** аяҡ кейеме бауын сисеү; **düğmeleri çözmek** төймәне ысҡындырыу 2. сисеү, осона сығыу, хәл итеү

çözümleme анализ, тикшеренеү; **nicel çözümleme** һан яғынан анализ; **gramerce çözümleme** *лингв.* грамматик анализ

çuha буҫтау; **kara çuha** ҡара буҫтау

çukur соҡор; **çukur açmak** соҡор ҡаҙыу

çuval тоҡ; **un çuvalı** он тоғо; **bir çuval patates** бер тоҡ картуф

çürük 1. сөрөк, серек, күгәргән, бәҫәргән; **çürük ağaç** серек ағас; **çürük diş** серек теш 2. нигеҙләнмәгән, нигеҙһеҙ; **çürük fikir** нигеҙһеҙ фекер

çürümek сереү, күгәреү, бәҫәреү; **havuç çürüdü** кишер серене

D

da *киҫ.* ла-лә, ҙа-ҙә, та-тә, да-дә; **ben onu da gördüm** мин уны ла күрҙем; **bu hiç de doğru değil** был һис кенә лә дөрөҫ түгел

dağ I тау; **dağ adamı** тау кешеһе; **dağ başı** тау башы; **dağ eteği** тау итәге; **dağ iklimi** тау климаты

dağ II тамға; **dağ basmak** тамға баҫыу

dağdağa 1. шау-шыу, ығы-зығы 2. ваҡ-төйәк эш, мәшәкәт; **yaşama dağdağası** донъя мәшәкәте

dağılmak 1. таралыу, тарҡалыу; **bulutlar dağıldı** болоттар таралды 2. тағатыу, туҙыу; **kızın saçı dağıldı** ҡыҙҙың сәсе туҙҙы

dağıtıcı таратыусы, почтальон; **gazete dağıtıcıları** гәзит таратыусылар

dağıtım бүлеп (өләшеп) биреү, бүленеш; **milli gelir dağıtımı** милли керем бүленеше

dağıtmak 1. бүлеү, өләшеү; **para dağıtmak** аҡса өләшеү; **yemek dağıtmak** аҙыҡ өләшеү 2. ҡыуып ебәреү, таратыу; **düşmanı dağıtmak** дошманды ҡыуып ебәреү; **rüzgar bulutları dağıttı** ел болоттарҙы таратты 3. бола яһау, болартыу; **kağıtları dağıtmak** ҡағыҙҙарҙы болартыу; **odayı dağıtmak** өйҙө болартыу

dağlamak 1. (өтөп) тамға яһау, тамғалау 2. ныҡ итеп әсеттереү, өтөү; **biber ağzını dağladı** борос ауыҙын өттө; **soğuk yüzümü dağladı** һыуыҡ битемде өттө

daha әле, әлеге, әле һаман, тағы, тағы ла; **daha gelmedi** әле һаман килмәне; **daha çabuk** тағы ла шәберәк; **daha erken** тағы ла иртәрәк; **ne kadar daha** тағы күпме

dahi шулай уҡ, хатта; **bunu ben dahi bilmiyorum** быны хатта мин белмәйем

dahilî эске; **dahilî emniyet** эске хәүефһеҙлек; **dahilî hastalıklar** эске ауырыуҙар; **dahilî ticaret** эске сауҙа

dahiliye эске; **Dahiliye nezareti. Dahiliye Vekaleti** Эске эштәр министрлығы

daimî даими, өҙлөкһөҙ, мәңге, мәңгелек; **daimî bîtaraflık** даими битарафлыҡ; **daimî encümen** даими комитет; **daimî karlar** мәңгелек ҡарҙар; **daimî ordu** даими армия

dair нимәгәлер мөнәсәбәт булған, нимәгәлер ҡағылған; **dile dair mesele** телгә ҡағылған мәсьәлә; **size dair** һеҙгә ҡарата, һеҙҙең хаҡта

daire 1. түңәрәк; **daire alanı** түңәрәк майҙаны 2. фатир; **sıcak sulu daire** эҫе һыуы булған фатир 3. учреждение, контора, идара, бүлек, бюро; **personel dairesi** кадрҙар бүлеге; **evlendirme (nikah) dairesi** никахты теркәү бюроһы

dakik камил, аныҡ, теүәл; **dakik aletler** аныҡ приборҙар

dakika минут; **bu iş beş dakika sürmez** был эш биш минут та алмаҫ

dal 1. ботаҡ; **çam dalı** ҡарағай ботағы 2. *кусм.* тармаҡ; **ilim dalı** фән тармағы; **sanayi dalı** промышленность тармағы

dalamak 1. тешләшеү 2. өтөү, сағыу, ауырттырыу; **ısırgan elimi daladı** кесерткән ҡулымды саҡты

daldırmak 1. төшөрөү, батырыу; **kaşığı çorbaya daldırmak** ҡалаҡты һурпаға төшөрөү 2. индереү, тығыу; **elini cebine daldırmak** ҡулды кеҫәгә тығыу

dalga 1. тулҡын; **kısa dalga** ҡыҫҡа тулҡын 2. ағым; **insan dalgası** халыҡтар ағымы

dalgalanmak тулҡынланыу

dalmak 1. сумыу; **denize dalmak** диңгеҙгә сумыу 2. ойоп китеү, йоҡоға талыу; **hasta yine daldı** ауырыу тағы ла ойоп китте

daltaban ялан аяҡ; **daltaban yürümek** ялан аяҡ йөрөү

dam өй түбәһе, ҡыйыҡ; **bütün damlar karla örtülü** ҡыйыҡтар ҡар менән ҡапланған

damak *анат.* аңҡау; **damak eteği** йомшаҡ аңҡау; **damak kemiği** ҡаты аңҡау

damar 1. *анат.* тамыр, вена; **kan damarı** ҡан тамыры 2. *күсм.* ғәҙәт, холоҡ; **damarı bozuk** боҙоҡ холоҡло

damla 1. тамсы; **bir damla su** бер тамсы һыу 2. паралич

damlamak тамыу; **örtüye yağ damlamış** ашъяулыҡҡа май тамған

dana тана; **dana eti** тана ите

danışım кәңәшмә, консультация

danışma белешмә, кәңәшмә; **danışma bürosu** белешмәләр бюроһы

danışmak кәңәшләшеү; **avukata danışmak** адвокат менән кәңәшләшеү

danışman кәңәшсе, советник, консультант

danış ғилем, белем, фән; **ehli danış** фән эйәләре; **encümeni danış** ғилми кәңәшмә (совет)

dar 1. тар, ҡыҫыҡ; **dar ayakkabı** ҡыҫыҡ аяҡ кейеме 2. ярлы, фәкир; **dar bütçe** ярлы бюджет; **dar dirlik** ярлылыҡ, фәкирлек

darbe 1. һуғыу, бәреү, тибеү; **darbei şems** ҡояш һуғыу (көн тейеү) 2. алмашыныу; **hükümet darbesi** хөкүмәт алмашыныуы

darbımesel мәҡәл, әйтем

darılmak 1. асыу килеү, асыу тотоу, асыуланыу 2. үпкәләү, хәтер ҡалыу; **darılmayınız!** үпкәләмәгеҙ!

dava *юр.* суд процессы; **dava açmak** хөкөмгә тарттырыу

davar ваҡ мал **davar sürüsü** көҙә, һарыҡ (ваҡ мал) көтөүе

davet 1. саҡырыу; **davet varakası** саҡырыу билеты 2. ҡабул итеү, банкет; **davel vermek** банкет биреү

davetiyi саҡырыу, саҡырыу хаты

dayak тән язаһы; **dayak atmak** бәргеләп алыу, туҡмау

dayanık ныҡлыҡ, көслөлөк

dayanmak таяныу; **ağaca dayanmak** ағасҡа таяныу; **değneğe dayanmak** таяҡҡа таяныу

dede ҡартатай, олатай

defa тапҡыр; **defalarca** күп тапҡыр, бер нисә тапҡыр; **bazı defa** ҡай саҡта, бәҙәлә; **bir defa** бер тапҡыр, бер ваҡыт; **bu defa** был юлы; **çok defa** күп тапҡыр

defter дәфтәр, журнал; **defter sayfası** дәфтәр бите

değer 1. хаҡ, баһа; **değer biçmek** баһа биреү 2. *күсм.* әһәмиәт, ҡиммәт

değerli 1. затлы, ҡиммәтле 2. *кусм.* ҡәҙерле, хөрмәтле; **değerli anne** ҡәҙерле әсәй

değil түгел; **değilim** мин түгел; **değilsin** һин түгел; **değil mi?** түгелме? **iyi değil** яҡшы түгел; **memnun değil** ҡәнәғәт түгел

değişmek үҙгәреү, алмашыныу; **hava değişti** һауа алмашынды

değmek I тейеү, ҡағылыу; **elime değdi** ҡулыма тейҙе

değmek II тороу; **bu kitap on lira değer** был китап ун лира тора

değnek таяҡ; **kızak değneği** саңғы таяғы

deli аҡылдан яҙған, аҡылһыҙ, тиле; **deli adam** тиле кеше

delice 1. дыуамал, тинтәк 2. ҡырағай *(үҫемлектәргә, хайуандарға ҡарата)*; **delice hayvan** ҡырағай хайуан

delik 1. тишек, ярыҡ 2. *кусм.* төрмә; **deliğe girmek** төрмәгә инеү

demeç сығыш, телмәр; **demeç vermek** сығыш яһау

demek әйтеү, һөйләү; **ben bir şey demedim** мин бер нәмә лә әйтмәнем

demir тимер; **demir cevheri** тимер мәғҙәне ◊ **gemi demiri** якорь

deniz диңгеҙ; **açık deniz** асыҡ диңгеҙ

deprem ер тетрәү

derece 1. дәрәжә 2. градус; **otuz derece** утыҙ градус 3. градусник; **derece koymak** градусник ҡуйыу

dergi журнал, йыйынтыҡ; **dergi kapağı** журнал тышы

deri тире, күн; **tavşan derisi** ҡуян тиреһе

derin тәрән; **derin bir kuyu** тәрән ҡойо; **derin bir uyku** тәрән йоҡо

derman көс, көс-хәл; **yürümeğe dermanı yok** йөрөргә көсө юҡ

ders дәрес, лекция; **ders çalışmak** дәрес әҙерләү; **derse girmemek** дәрескә йөрөмәү

dert яфа, ғазап; **dert çekmek** ғазап сигеү

deste бәйләм, ус, өйөм, ҡосаҡ; **bir deste çamaşır** бер өйөм кер

deve дөйә; **deve köçeği** дөйә балаһы

devir дәүер, эпоха, заман, осор; **devri felek** яҙмыш

devirmek ауҙарыу, ҡолатыу, түңкәреү; **hükümeti devirmek** хөкүмәтте ҡолатыу

devlet дәүләт, империя; **devlet başkanı** хөкүмәт башлығы, президент

dikkat диҡҡәт, иғтибар; **dikkate almak** иғтибарға алыу

dikmek I ҡуйыу, урынлаштырыу, ултыртыу; **direk dikmek** баҫана ултыртыу; **bir heykel dikmek** һәйкәл ҡуйыу; **ağaç dikmek** ағас ултыртыу

dikmek II тегеү; **elbise dikmek** күлдәк тегеү

dil 1. *анат.* тел; **küçük dil** кескәй тел 2. тел, һөйләш, телмәр; **bölge dili** урындағы һөйләш; **konuşma dili** һөйләү теле

dilek теләк; **kutsal dilek** изге теләк

dilemek теләү; **sıhhat dilerim** һаулык теләйем

horoz 1. әтәс; **horozlar öttü** әтәстәр ҡысҡырҙы 2. тәте, сиртекес; **tüfek horozu** мылтыҡ тәтеһе

hortum 1. томшоқ 2. шланг: **lastik hortum** резина шланг

hoş күңелгә ятышлы, яғымлы, хуш; **hoş bir ses** яғымлы тауыш; **tadı pek hoş** тәме бик татлы; **hoş geldiniz!** хуш килдегеҙ!

hoşaf компот; **hoşaf içmek** компот эсеү

hoşamedi ҡаршылау тантанаһы; **beyanî hoşamedi etmek** сәләм биреү, сәләмләү

hoşbeş сәләмләү; **hoşdeş etmek** ләстит һатыу, һөйләшеү

hoşbu хуш еҫле

hoşlanmak ҡәнәғәтләнеү, оҡшау; **bu sözlerden hoşlandı** был һүҙҙәрҙән ҡәнәғәтләнде

hoşnutluk ҡәнәғәтлек, ризалыҡ; **hoşnutluk getirmek** шатландырыу, кинәндереү

hörgüç үркәс *(дөйәнең)*

hörgüçlü үркәсле; **iki hörgüçlü deve** ике үркәсле дөйә

hudut сик; **davlet hudutu** дәүләт сиге; **hududu geçmek** сикте боҙоу

hudutlandırmak сик үткәреү; сик ҡуйыу

hukuk 1. хоҡуҡ; **hukuki siyasiye** сәйәси хоҡуҡ; **şahsın hukuku** шәхес хоҡуғы 2. дуҫлыҡ, дуҫлыҡ мөнәсәбәте; **onunla eski hukukumuz var** уның менән иҫке дуҫтарбыҙ

hulâsa төп нигеҙ, айыш, асыл, һығымта, йомғаҡ; **bir yazının hulasası** мәҡәләнең һығымтаһы

hulus 1. асыҡтан-асыҡ, ихлас; **hulus ilekonuşmak** асыҡтан-асыҡ һөйләшеү 2. ярамһаҡлыҡ, ҡуштанлыҡ; **hulus çakmak** ҡуштанлыҡ күрһәтеү

humma биҙгәк, тапма; **humma alçak** биҙгәк тотоу

hurda ваҡ-төйәк нәмәләр, иҫке-моҫҡолар, металл һыныҡтары; **hurda demir** тимер һынығы

husul ғәмәлгә (бойомға, тормошҡа) ашыу, үтәлеү, ирешеү; **husulü maksat** маҡсатҡа ирешеү

husumet дошманлыҡ, хаслыҡ, кенә, күрә алмаусылыҡ, нәфрәт; **izharı husumet etmek** кенә тотоу

husus эш, хәл, мәсьәлә; **bu hususta** был мәсьәләлә; **bu hususta ne düşünüyorsunuz?** был эш буйынса нимә уйлайһығыҙ?

hususî үҙенсә башҡа, үҙенә бер төрлө, махсус; **hususî şerait** үҙенә бер төрлө шарт; **hususî talim ve terbiye** махсус әҙерлек; **hususî muhabir** махсус корреспондент

hususiyet үҙенсәлек, үҙенә бер төрлө сифат; **hususiyet vermek** үҙенсәлек биреү

huy холоҡ, ҡылыҡ, ғәҙәт; **huyu suyu** характер; **huyunu suyunu bilmiyorum** характерын (холҡон) белмәйем; **huyuna suyuna gitmek** күңелен күреү; **melek huylu** фәрештә холоҡло

huylanmak 1. ныҡ борсолоу, ныҡ тулҡынланыу 2. ныҡ асыуланыу, ҡыҙыу, туҙыу 3. баш бирмәү *(малға ҡарата)*

huzur 1. тыныслыҡ, күңел тыныслығы; **huzurunu bozmak** тыныслыҡты боҙоу 2. кемдеңдер алдында; **huzurunuzda** һеҙҙең алда; **davetliler huzurunda** килеүселәр алдында

hücre камера, бүлмә, каюта; **tek kişilik hücre** бер кешелек каюта

hücum һөжүм, атака, штурм; **hücum hattı** *спорт.* һөжүм һыҙығы

hüküm законлылыҡ, көс; **hükümü cari kalır** көсөндә ҡалыр; **hükümden düşmek** көсөн юғалтыу

hükümdarlık монархия, юғары хакимиәт, хакимлыҡ; **meşrutiyetçi hükümdarlik** конституцион монархия; **hükümdarlık etmek** батшалыҡ итеү

hükümet хөкүмәт; **hükümeti düşürmek** хөкүмәтте бәреп төшөрөү

hüner һөнәр, маһирлыҡ, талант; **hüner göstermek** һөнәр күрһәтеү

hür азат, хөр, ирекле; **hür seçim** ирекле һайлау; **hür olmak** азат булыу

hürlük азатлыҡ, хөрлөк, иреклек

hürmet хөрмәт; **hürmet görmek** хөрмәт күреү

hürriyet азатлыҡ, ирек, иреклек, хөрриәт; **hürriyete kavuşmak** азатлыҡ алыу; **siyasi hürriyet** сәйәси азатлыҡ

I

ılık йылы; **ılık hava** йылы һауа; **ılık su** йылы һыу; **ılık söz** йылы һүҙ

ırz намыҫ; **ırzına dokunmak** намыҫына тейеү

ısı 1. йылылыҡ; **ısı enerjisi** йылылыҡ энергияһы 2. температура; **en buyük ısı** иң юғары температура

ısınmak йылыныу, эҫенеү; **su ısındı** һыу йылынды

ısırmak тешләү; **dudak ısırmak** ирен тешләү

ısıtmak йылытыу, эҫетеү; **suyu ısıtmak** һыуҙы йылытыу

ıslah 1. үҙгәртеү, реформа 2. төҙәтеү, яңынан тәрбиәләү

ıslak һыулы, еүеш, дымлы; **ıslak bez** еүеш сепрәк; **ıslak yer** дымлы урын

ıslatmak еүешләү, ебетеү; **tohum ıslatmak** орлоҡ ебетеү

ısrar ныҡышлыҡ, ныҡышмалылыҡ; **ısrar etmek** ныҡышыу

ıstılah термин; **fenni ıstılah** фәнни термин

ıstılahat терминология

ıstıraplı ғазаплы, ауыр, ҡайғылы; **ıstıraplı günler** ғазаплы көндәр

ışık яҡтылыҡ, ут; **ışık almak** ут яҡтыртыу; **ışık söndürmek** ут һүндереү

ışıldamak балҡыу, йымылдау, йылтылдау; **yıldızlar ışıldar** йондоҙҙар балҡыр

ışıldak прожектор

ışın нур; **güneş ışınları** ҡояш нурҙары

İ

iare заем, ссуда, прокат; **iare etmek** үтескә бирегү; прокатҡа бирегү

ibare әйтелгән һүҙ, фекер; **ibarenin açıklığı** фекер асыҡлығы

ibcal хөрмәт, ихтирам, ҡәҙер-хөрмәт; **ibcal etmek** хөрмәт итеү

ibik кикрек; **horoz ibiği** әтәс кикреге

ibret һабаҡ, фәһем, ғибрәт; **ibret almak** фәһем алыу

icabet ризалыҡ; **icabet etmek** ризалашыу

icat асыш, уйлап табыу; **icat etmek** уйлап табыу, асыу

icbar мәжбүрилек; **icbar etmek** мәжбүр итеү, көсләү

icmal ҡыҫҡаса яҙыу, эстәлек, конспект, резюме; **icmal etmek** ҡыҫҡаса яҙыу

icra 1. башҡарыу, үтәү; **icra komitesi** башҡарма комитет 2. музыкаль әҫәр башҡарылышы; **şarkının icrası** йырҙың башҡарылышы

iç 1. эс, эске; **evin içi** өйҙөң эсе; **iç cebi** эске кеҫә 2. эске донъя, күңел; **iç ferahlığı** күңел күтәренкелеге

içeri эске өлөш, эске яҡ; **içeri girmek** эс яҡҡа үтеү; **içeri buyurun!** эске яҡҡа рәхим итегеҙ! **içerisi soğuktur** эске яҡта һыуыҡ

içerlek алыҫтағы, ситтәге; **bir içerlek dükkan** алыҫтағы магазин

içilir эсә торған, эсәр; **içilir su** эсә торған һыу

içim 1. эсеү 2. тартыу; **sigara içimi** тәмәке тартыу 3. бер йотом; **bir içim su** бер йотом һыу

için *бәйл.* өсөн; **annem için** әсәйем өсөн; **dünya barışı için** донъя тыныслығы өсөн; **bugünü anlamak için dünü bilmek gerek** бөгөнгөнө аңлар өсөн үткәнде белеү кәрәк

içinde *бәйл.* эсендә; **orman içinde** урман эсендә; **rahat ve huzur içinde yaşamak** тыныслыҡ һәм хозур эсендә йәшәү

içindeki эсендәге; **devletin içindeki düşmanlar** дәүләт эсендәге дошмандар

içirmek 1. эсереү; **çay içirmek** сәй эсереү 2. тарттырыу; **tütün içirmek** тәмәке тарттырыу

içişleri эске эштәр; **İçişleri Bakanı** Эске эштәр министры; **İçişleri Bakanlığı** Эске эштәр министрлыгы

içli 1. емешле, төшлө *(емешкә ҡарата)* 2. хисле, тойғоло; **içli kız** хисле ҡыҙ 3. матур, күркәм, йылы; **içli sözler** йылы һүҙҙәр

içmek 1. эсеү; **çay içmek** сәй эсеү; **çorba içmek** һурпа эсеү 2. тартыу; **tütün içmek memnudur!** тәмәке тартыу тыйыла! **pipo içmek** төрөпкә тартыу 3. һеңдереү, үҙенә тартыу, һурыу; **toprak suyu içer** тупраҡ һыуҙы һеңдерә

içten 1. ысын күңелдән, ихлас, эскерһеҙ, саф күңелдән; **içten bir dilek** ысын күңелдән әйтелгән теләк 2. эске; **içten bağıntılar** эске бәйләнештәр; **içten sebepler** эске сәбәптәр

içtihat фекер, ҡараш, ышаныс; **benim içtihatım böyledir** минең ҡарашым шулай

içtima 1. тупланыш, концентрация 2. йыйылыш, кәңәшмә, ултырыш; **içtima binası** кәңәшмәләр бинаһы

içtimai ижтимағи, социаль; **içtimai hayat** ижтимағи тормош

idame дауам; **idame etmek** дауам итеү

idare идара; **yurt idaresi** ил менән идара итеү

idman *спорт.* күнегеүҙәр, тренировка; **idman yapmak** күнегеүҙәр яһау; **sabah idmanı** иртәнге зарядка

idmancı спортсы, физкультурасы

iffet 1. ғиффәтлек, сафлыҡ 2. намыҫлылыҡ, инсафлыҡ

ifham аҡыл биреү, өйрәнеү, аңлатыу, төшөндөрөү; **ifham etmek** аңлатып биреү, төшөндөрөү

iflah 1. яҡшылыҡ, рәхимлек 2. сирҙән ҡотолоу, һауығыу; **Allah iflah etsin!** Алла ярҙам итһен (ауырыуҙан ҡотолһон)!

iflas бөлгөнлөк, банкротлыҡ; **iflasını ilân etmek** банкротлыҡ иғлан итеү

ifsat 1. боҙоу, тар-мар итеү, емереү 2. ҡотҡо, сыуалышҡа (буталышҡа) саҡырыу

iftihar ғорурлыҡ, намыҫ, дан; **iftihar etmek** ғорурланыу, ғорурлыҡ тойғоһо кисереү

iğne 1. энә; **iğne gözü** энә күҙе; **iğneye iplik geçirmek** энәгә еп һаплау 2. төйрәмес (булавка), брошка; **iğne topu** төйрәмес башы 3.уҡ, тел; **saat iğnesi** сәғәт уғы 4. ҡаяу; **iğnesini batırmak** ҡаяуын батырыу 5. ырғаҡ *(ҡармаҡтыҡы)*; **balık iğnesi** ҡармаҡ ырғағы 6. ылыҫ, энә; **iğne yapraklılar** ылыҫлылар ғаиләһе

iğnelemek сәнсеү, энә менән сәнсеү

iğneleyici сәнскеле, үткер; **iğneleyici dil** үткер тел; **iğneleyici sözler** сәнскеле һүҙҙәр

iğrenç ерәнес, ерәнеү, сикәнес; **iğrenç kişi** ерәнес кеше

iğtinam һуғышта баҫып алынған табыш, трофей; **iğtinam etmek** баҫып (талап) алыу

ihata ҡамау, осада; **ihata hareketi** ҡамау хәрәкәте

ihda бүләк; **ihda etmek** бүләк итеү

ihlas ихласлыҡ, саф күңеллелек

ihmal иғтибарһыҙлыҡ, һүлпәнлек; **ihmalı etmek** иғтибарһыҙлыҡ күрһәтеү

ihraç 1. экспорт, сит илгә сығарыу; **ihraç eşyaları** сит илгә сығарыу тауарҙары 2. эштән (хеҙмәттән) сығыу; **ordudan ihraç** армиянан ҡайтыу 3. десант; **deniz ihracı** диңгеҙ десанты

ihsan яҡшылыҡ, изгелек, миһырбанлыҡ

ihtikâr еңел кәсеп, спекуляция; **ihtikâr etmek** еңел кәсеп менән шөғөлләнеү

ihtilaf килешмәүсәнлек, бәхәс, конфликт, аңлашылмаусылыҡ, төрлөлөк; **fikir ihtilafı** фекер төрлөлөгө

ihtilal 1. революция; **proletarya ihtilali** пролетарийҙар революцияһы 2. сыуалыш, бола; **ihtilal çıkarmak** бола сығарыу

ihtimal мөмкинлек, ихтималлыҡ

ihtimam 1. хәстәрлек күреү, ҡайғыртыу, хәстәрлек; **ihtimam göstermek** хәстәрлек күрһәтеү 2. тырышлыҡ, тырышыу; **ihtimam etmek** тырышыу

ihtiram ихтирам, хөрмәт, ҡәҙер-хөрмәт; **ihtiram etmek** ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеү

ihtiyaç ихтыяж; **ihtiyaç duymak** ихтыяж кисереү

ihtiyar I ҡарт кеше; **ihtiyar kadın** ҡарт ҡатын, ҡарсыҡ; **ihtiyar olmak** ҡартайыу

ihtiyar II ихтыяр

ihtiyat 1. һаҡлыҡ, абайлыҡ; **ihtiyat tedbirleri** һаҡлыҡ саралары 2. резерв, запас; **altın ihtiyatı** алтын запасы

ikamet йәшәгән (торған) урын; **ikamet mahalli** йәшәгән урын

ikbal 1. бәхет, рәхәтлек, муллыҡ, уңышлыҡ; **devlet ve ikbal ile** хәйерле юл! хәйерле сәғәттә! 2. хөрмәт, ҡәҙер-хөрмәт; **ikbalden düşmek** ҡәҙерен төшөрөү

ikdam 1. алға килеш, прогресс 2. алға ынтылыусанлыҡ, тырышлыҡ; **ikdam etmek** тырышлыҡ күрһәтеү, тырышыу

iki 1. ике; **iki kat** ике ҡат 2. икеле; **edebiyattan iki aldı** әҙәбиәттән икеле алды

ikinci икенсе; **İkinci Cihan Harbi** Икенсе Донъя һуғышы

ikindi 1. төштән һуңғы ваҡыт 2. өсөнсө намаҙ

iki yüzlü 1. ике йөҙлө; **iki yüzlü adam** ике йөҙлө кеше 2. уңы-һулы бер, ике яғы бер төҫлө; **iki yüzlü kumaş** уңы-һулы бер тауар 3. ике йөҙө лә үткер; **iki yüzlü kılıç** ике йөҙө лә үткер ҡылыс

ikiz игеҙ; **ikiz doğmak** игеҙ тыуыу

iklim климат; **sert iklim** урта климат

ikram 1. намыҫ, хөрмәт 2. һый, мәжлес; **ikram yapmak** һыйлау

iktidar 1. көс, ҡеүәт; **muharebe iktidarı** хәрби көс 2.власть; **iktidara çıkmak** власҡа килеү

iktidarlı 1. көслө, ҡеүәтле 2. булдыҡлы, зирәк, талантлы

iktisat 1. иҡтисад, халыҡ хужалығы; **İktisat vekaleti** Иҡтисад министрлығы

il ил, ватан; **gurbet iller** сит илдәр

ilâç дарыу, медикамент; **ilâç dolabı** аптечка; **ilâç içmek** дарыу эсеү

ilân 1. иғлан, публикация, декларация; **harp ilânı** һуғыш иғлан итеү 2. афиша, реклама, белдереү, анонс; **ilan tahtası** белдереү таҡтаһы

ilâve өҫтәмә, ҡушымта; **ilâveler yapmak** өҫтәмә яһау

ile *бәйл.* менән; **büyük bir alaka ile** ҙур ҡыҙыҡһыныу менән; **kiminle? kimle?** кем менән? **atla** ат менән; **bıçakla kesmek** бысаҡ менән киҫеү

ileri 1. ал, алды; **kafilenin ilerisinde** колонна алдында 2. ахыры, дауамы, киләсәге; **ilerisini düşünmek** киләсәген уйлау

ilerici алдынғы, прогрессив; **ilerici bir yazar** алдынғы яҙыусы; **ilerici insanlık** прогрессив кешелек

ileride 1. алда 2. артабан, киләсәктә

ileri gelen 1. танылған, билдәле, күренекле, абруйлы; **ileri gelen devlet adamı** күренекле дәүләт эшмәкәре 2. алдынғы, прогрессив

ilerilik прогрессивлыҡ, прогресс

ilerlemek алға барыу; **vakit ilerliyor** ваҡыт үтә

iletmek илтеү, алып китеү, тапшырыу; **Ahmet beye selamlârınızı ilettim** Әхмәт бейгә сәләмдәрегеҙҙе тапшырҙым

ilgi 1. мөнәсәбәт, бәйләнеш; **ilgiyi kesmek** бәйләнеште өҙөү 2.иғтибар итеү, ҡыҙыҡһыныу; **ilgi çekmek** ҡыҙыҡһыныу уятыу

ilgilenmek ҡыҙыҡһыныу; **bu işle çok ilgilendim** был эш менән ныҡ ҡыҙыҡһындым; **ülkenizdeki eğitim sistemi ile ilgileniyorum** мине илегеҙҙәге мәғариф системаһы ҡыҙыҡһындыра

ilham илһам; **ilham almak** илһам алыу

ilik *анат.* елек; **murdar ilik** арҡа елеге

iliklemek элеү, ҡаптырыу; **düğmeleri iliklemek** төймәләрҙе ҡаптырыу

ilim фән, ғилем, белем; **ilim adamı** ғилми хеҙмәткәр; **ilimi ahlak** этика

ilişki бәйләнеш; **Başkurtistan-Türkiye ilişkileri** Башҡортостан-Төркиә бәйләнештәре

ilk 1. тәүге, беренсе; **ilk adım** тәүге аҙым; **ilk ders** беренсе дәрес 2. алғы, алдынғы; **ilk hat** *хәрб.* алғы һыҙыҡ

ilmi ғилми; **ilmi araştırma** ғилми тикшеренеү; **ilmi araştırma enstitüsü** ғилми тикшеренеү институты

iltibas буталсыҡ, аңлашылмаусылыҡ; **iltibasa düşmek** буталыу, буталып бөтөү

iltifat асыҡ йөҙлөлөк, ҙур иғтибар, яғымлылыҡ; **iltifat göstermek** хөрмәт (илтифат) күрһәтеү; **iltifat etmek** асыҡ йөҙ күрһәтеү

iltimas яҡлау, яҡлаусылыҡ, протекция; **iltimas görmek** (кемдеңдер) ҡанат аҫтында булыу

iman иман; **imana gelmek** үҙ теләге менән мосолман динен ҡабул итеү

imar төҙөлөш; **imar planı** төҙөлөш планы

imdat ярҙам; **imadat arabası** ашығыс ярҙам машинаһы

imge билдә, билге, симптом

imlâ дөрөҫ яҙыу, орфография; **imla lügatı** орфография һүҙлеге

imsak сама белеү, самалыҡ, диета; **yemek hususunda imsak** ашау-эсеүҙә сама белеү

imtihan һынау, имтихан, экзамен; **imtihan vermek** имтихан биреү

imtizaç мөнәсәбәттәрҙең тап килеүе, татыулыҡ, ризалыҡ; **hüsnü imtizaç** яҡшы мөнәсәбәт; **imtizaç etmek** татыу йәшәү

imza имза, автограф; **imza koymak** имза ҡуйыу

imzalamak имза (ҡул) ҡуйыу

in өң; **ayı ini** айыу өңө

inan 1. ышаныс, инаныс; **inanı kaybetmek** ышаныҫты юғалтыу 2. гарантия; **inan vermek** гарантия биреү

inanmak ышаныу, инаныу; **inanası gelmek** ышанаһы килеү

inat тиҫкәрелек, үҙһүҙлек, кирелек; **inata binmek** ҡарышыу, тиҫкәреләнеү

ince 1. йоҡа; **ince zar** йоҡа ҡабыҡ 2. ваҡ; **ince kum** ваҡ ҡом; **ince tuz** ваҡ тоҙ; **ince yağmur** ваҡ ямғыр 3. эҙәпле, нәзәкәтле, ипле; **ince adam** ипле кеше

inceleme өйрәнеү, тикшеренеү; **dil incelemeleri** тел буйынса тикшеренеүҙәр; **kozmik incelemeler** космик тикшеренеүҙәр

incelemek өйрәнеү, тикшереү, тикшереүҙәр алып барыу; **durumu incelemek** урындағы хәлде өйрәнеү

inci ынйы; **inciden gerdanlık** ынйы муйынсаҡ; **halis inci** саф ынйы; **inci küpe** ынйы ҡашлы алҡа

incitmek 1. һуғып (бәреп) имгәтеү, кимәлйетеү, биртендереү, ҡаймыҡтырыу; **ayağını incitti** аяғын ҡаймыҡтырҙы 2. үпкәләтеү, хәтер ҡалдырыу; **sözlerinizle beni çok incittiniz** һүҙҙәрегеҙ менән мине бик ныҡ үпкәләттегеҙ

indirim кәметеү, төшөрөү *(хаҡҡа ҡарата)*; **indirim yapmak** хаҡ төшөрөү

indirmek төшөрөү; **bayrakları indirmek** байраҡтарҙы төшөрөү; **gemiyi denize indirmek** карапты диңгеҙгә төшөрөү;

fiyatını indirmek хаҡ төшөрөү; **tahttan indirmek** тәхеттән төшөрөү

inek һыйыр; **sağımlı inek** һауым һыйыр; **kısır inek** ҡыҫыр һыйыр; **sütlü inek** һөтлө һыйыр; **inek eti** һыйыр ите

infial асыу, ризаһыҙлыҡ; **infial etmek** ризаһыҙлыҡ белдереү

ingin тәпәшәк, түбән; **ingin yer** түбән урын

inkılap революция; **Oktobr inkılabı** Октябрь революцияһы

inkıta тәнәфес, туҡталыш, ваҡытлыса туҡталыу; **inkıta etmek** туҡтап тороу

inmek төшөү, ергә төшөү, ултырыу; **iner kalkar köprü** күтәрелмәле күпер; **perde indi** пәрҙә (шаршау) ҡоролдо (төштө); **uçak indi** самолет ултырҙы; **yağmurdan duvar inmiş** ямғырҙан стена ултырҙы

insaf 1. ғәҙеллек, намыҫ; **insafa davet etmek** ғәҙеллеккә өндәү 2. миһырбанлыҡ, шәфҡәтлелек

insan кеше, кешеләр; **insan hayatı** кеше ғүмере

insanlık кешелек; **insanlık tarihi** кешелек тарихы

inşa төҙөлөш, ҡоролош, ҡоролма, йыһаз; **inşa maddesi** төҙөлөш материалы; **inşa etmek** төҙөү, ҡороу, ижад итеү

inşaatçı төҙөүсе

intan 1. һаҫыҡ (яман) еҫ 2. инфекция, йоғошло ауырыу

intihap һайлау, һайланыу; **intihap dairesi** һайлау округы **mebus intihabı** депутат һайлау

intikal күсеү; **intikal devri** күсеү осоро

intikam үс, ҡон; **intikam almak** үс алыу

intizam тәртип; **intizama koymak** тәртипкә килтереү

intizar көтөү, көтөп алыу; **intizar salonu** көтөү залы

ip бәй, бау, еп, шнур, канат, трос; **iple bağlamak** бау менән бәйләү; **çamaşırı ipe sermek** керҙе бауға элеү

ipek ебәк; **ipek fabrikası** ебәк фабрикаһы; **ipek astar** ебәк эслек; **ipek çorap** ебәк ойоҡ

iplik еп; **kalın iplik** ҡалын еп; **makara ipliği** кәтүк ебе; **iplik bükme** еп иләү

irade ихтыяр; **irade kuvveti** ихтыяр көсө

irat доход, төшөм, килем; **saf irat** саф килем; **iratı senevi** йыллыҡ килем

iri 1. ҙур, эре; **iri bir elma** эре алма; **iri buğday** эре бойҙай; **iri damlalar** эре тамсылар 2. тупаҫ, хәтерҙе ҡалдыра торған; **iri laflar** тупаҫ һүҙҙәр

irin эрен; **irin bağlamak** эренләү, эрен йыйыу

irsal ебәреү, һалыу, оҙатыу; **mektubu tayyare ile irsal etmek** хатты авиапочта менән ебәреү

irsî нәҫелдән килгән, нәҫел буйынса килгән; **irsî hastalıklar** нәҫелдән килгән ауырыуҙар

irtifa бейеклек, түшәм

is ыç, ҡором, һөрөм; **is çıkarmak** һөрөмләү; **isi tutmak** ыçлау *(балыҡты)*

isim 1. исем, атама; **isim koymak** исем ҡушыу; **isimi nedir?** исеме кем? 2. дан, шөһрәт, билдәлелек, танылғанлыҡ; **isim yapmak** дан ҡаҙаныу 3. *грам.* исем; **basit isim** ябай исем

iskarpin туфли; **rugan iskarpin** лакланған туфли; **şık iskarpin** модалы туфли; **ökçeli iskarpin** үксәле туфли

iskele пристань, причал

iskemle эскәмйә, табуретка, ултырғыс; **bebek iskemlesi** балалар ултырғысы; **bahçe iskemlesi** баҡса эскәмйәһе

islemek ыçлау

isli ыçланған, ыçлы; **isli balık** ыçланған балыҡ; **isli sucuk** ыçланған колбаса

ispat раçлау, иçбатлау; **ispat kudreti** иçбатлау көсө; **cinayetin ispatı** енәйәтте иçбатлау

ispatlamak иçбатлау; **belgelerle ispatlamak** документтар ярҙамында иçбатлау

ispirto спирт; **saf ispirto** саф спирт; **kafurlu ispirto** камфоралы спирт; **ispirto çekmek** спирт ҡыуыу

israf әрәм-шәрәм итеү, туҙҙырыу, бушҡа сарыф итеү; **para israfı** аҡса туҙҙырыу; **israf etmek** сарыф итеү

istasyon станция, вокзал, платформа; **demiryolu istasyonu** тимер юл станцияһы; **tecrübe istasyonu** тәжрибә станцияһы; **gelecek istasyon nedir?** киләһе станция ниндәй?

istek 1. теләк; **istek olmak** теләк булыу; **bugün sinemaya gitmeğe isteğim yok** бөгөн киноға барырға теләгем юҡ 2. талап, һорау; **hayati istekler** тормош талаптары

istemek 1. теләү; **canım istemiyor** йәнем теләмәй 2. һорау; **benden bir kitap istedi** минән бер китап һораны 3. талап итеү; **hürriyet istemek** азатлыҡ талап итеү 4. нимәгәләр мохтаж булыу, нимәнелер яратыу; **elma (ağacı) sıcak ister** алмағас йылыны ярата 5. кемделер һорау, саҡырыу, эҙләү; **beni mi istedin?** мине эҙләнеңме? **doktoru yine bir köyden istemişler** докторҙы йәнә бер ауылға саҡырғандар 6. ҡоҙалау, киленлеккә һоратыу; **Ali'den kızını istemişti** Алиҙың ҡыҙын киленлеккә һоратты

istek кәрәклек, ихтыяж, талап; **şehir halkının istekleri** ҡала халҡының талаптары

istida үтенес, үтенеү, һорау, юллау, ғариза, петиция; **istida vermek** ғариза биреү; **izin istidası** отпуск һорап яҙылған ғариза

istidat һәләт, һәләтлелек, талант; **istidat muziki** музыкаға һәүәҫлек

istikbal 1. киләсәк; **istikbalde** киләсәктә; **istikbal için planlar** перспектив пландар; **büyük bir istikbali var** уның киләсәге ҙур 2. осрашыу, ҡаршылау; **istikbale çıkmak** ҡаршыларға сығыу;

istikbale gelmek ҡаршыларға килеү; **istikbal merasimi** тантаналы осрашыу

istilâ 1. баҫыу, ябырылыу; **çekirge istilâsı** саранча ябырылыуы; **su istilâsı** һыу баҫыу 2. баҫып алыу, оккупация; **istilâ harbi** баҫып алыу һуғышы

istilâci баҫып алыусы, оккупант

istinas өйрәнеү, өйрәнеп китеү; **istinası iklim** климатҡа өйрәнеү

istirahat ял, тыныслыҡ; **istirahatı ruh** рухи тыныслыҡ; **istirahat evi** ял йорто; **istirahat günü** ял көнө; **istirahata çekilmek** ялға китеү; **istirahat etmek** ял итеү

istismar иҙеү; **insanın insan tarafından istismarı** кешенең кеше тарафынан иҙелеүе

istismarcı иҙеүсе; **istismarcılara karşı mücadele** иҙеүселәргә ҡаршы көрәш

isyan бола, сыуалыш, бунт, восстание; **silahlı isyan** ҡораллы восстание; **isyanı bastırmak** восстаниены баҫтырыу; **isyan etmek** бола күтәреү

iş эш, хеҙмәт; **iş aleti** эш ҡоралы; **iş elbisesi** эш кейеме; **iş borsası** хеҙмәт биржаһы; **iş arkadaşı** хеҙмәттәш, коллега; **işe almak** эшкә алыу; **işten atmak** эштән сығарыу; **işim çiriş** эшем хөрт

işaret сигнал; **işaret bildirmek** сигнал биреү

işçi эшсе, хеҙмәткәр; **işçi sınıfı** эшселәр синыфы; **güzel sanatlar işçileri** сәнғәт хеҙмәткәрҙәре

işçilik 1. эшсе шөғөлө (профессияһы); **işçilik cüzdanı** хеҙмәт кенәгәһе 2. эш (хеҙмәт) хаҡы; **işçilik almak** эш хаҡы алыу

işitme 1. ишетеү; **işitme aleti** ишетеү аппараты; **işitme siniri** ишетеү нервыһы

işitmek ишетеү; **ağır işitmek** насар ишетеү, ҡолаҡҡа ҡаты булыу

işlem 1. процедура, операция; **resmi işlem** официаль процедура 2. эш, ҡылыҡ, процесс; **teknolojik işlem** технологик процесс

işleme эш; **işleme tarzı** эштең характеры (методы)

işlemek 1. эшләү, йөрөү *(пароходҡа, поезға ҡарата)*; **boşa işlemek** бушҡа эшләү; **trenler tarifelere göre işliyor** поездар расписание буйынса йөрөй 2. эшкәртеү; **deriyi işlemek** тире эшкәртеү; **toprağı işlemek** тупраҡты эшкәртеү 3. эренләү, эрен йыйыу; **parmağı işliyor** бармағы эренләй; **yaraları işliyor** яраһы эрен йыя

işleten йүнсел, хужа, эйә; **bar işleten** бар хужаһы

işlik 1. эш кейеме 2. оҫтахана

iştah 1. аппетит; **iştahı açılmak** аппетит асылыу; **kapanık iştah** аппетиты насар 2. теләк, дәрт; **iştahı kaçmak** дәртен һүндереү

iştibah шик, шөбһә; **iştibah etmek** шикләнеү, шөбһәләнеү, икеләнеү

iştidat көсәйеү, ҡатмарланыу, аҙыу *(ауырыуға ҡарата)*; **iştidat etmek** көсәйеп китеү, ҡатмарланыу, аҙыу

iştirak ҡатнашлыҡ (теләктәшлек, хеҙмәттәшлек) итеү; **iştirak etmek** ҡатнашлыҡ итеү, теләктәшлек күрһәтеү, хеҙмәттәшлек итеү

it эт; **it eniği** көсөк; **it kulübesi** эт оҙоны

ithal ситтән индерелгән тауар, импорт; **ithal malı** импорт тауары

itibar хөрмәт, ихтирам, абруй, авторитет; **itibarı artmak** абруйы артыу

itilaf осрашыу, күрешеү, әңгәмә

itimat ышаныу, ышаныс; **itimadını kazanmak** ышаныс яулау

itina хәстәр, хәстәрлек күреү, иғтибар; **itina göstermek** хәстәрлек күрһәтеү

itiraz ҡаршы төшөү (килеү), ҡаршылыҡ, протест; **itirazları çürütmek** ҡаршылыҡты кире ҡағыу; **buna itirazınız var mı?** быға ҡаршы килмәйһегеҙме?

itmek этеү; **masayı itmek** өҫтәлде этеү

ittifak ризалашыу, килешеү, берләшеү, союз; **ittifak etmek** үҙ-ара ризалыҡ белдереү

ittihat берләшеү, федерация; **ittihat etmek** ҡушылыу, берләшеү

iyi 1. яҡшы; **iyi alamet** яҡшы билдә; **en iyi dilekler** иң яҡшы теләктәр 2. файҙалы, яҡшы; **süt çocuklar için iyidir** һөт балаларға файҙалы

iyice яҡшы ғына, арыу ғына, һәйбәт кенә; **iyice bir ev** һәйбәт кенә өй; **hasta iyicedir** ауырыу үҙен арыу ғына тоя

iyileşmek 1. яҡшырыу, арыуланыу 2. һауығыу, сәләмәтләнеү, төҙәлеү; **hasta iyileşti** ауырыу сәләмәтләнде; **araları iyileşti** мөнәсәбәттәре яҡшырҙы; **hava iyileşti** көн арыуланды

iyilik 1. именлек, тыныслыҡ, бәхет 2. яҡшылыҡ, киң күңеллелек, изгелек; **iyilik göstermek** изгелек күрһәтеү

iz тамға, эҙ; **ayak izi** аяҡ эҙе; **parmak izi** бармаҡ эҙе; **izine basmak** эҙенә баҫыу

izafet *лингв.* изафет; **izafet zamiri** эйәлек алмашы

izah аңлатма; **izah etmek** аңлатыу, асыҡлау

izam һалып (оҙатып) ебәреү; **izam etmek** оҙатып ебәреү

izanlı аҡыллы, зирәк, һиҙгер; **izanlı çocuk** зирәк бала

izin 1. рөхсәт, ризалыҡ 2. отпуск, ял; **izin almak** отпуск алыу

izinname яҙма рөхсәт

izlemek күҙәтеү, ҡарау, тыңлау; **maçı izlemek** матч ҡарау; **televizyon izlemek** телевизор ҡарау

izlenim тәьҫир, тәьҫорат; **izlenim bırakmak** тәьҫир ҡалдырыу; **seyahat izlenimleri** юл тәьҫораттары

izlenmek иғтибар менән ҡарау, тыңлау; **Ahmedin konseri ilgi ile izlendi** Әхмәттең концерты иғтибар менән тыңланды

izzet намыҫ, хөрмәт, ихтирам, дан, бәхет, ҡеүәт; **izzetü ikbal içinde ömrünü tamamlamak** бәхет эсендә ғүмер үткәреү; **izzetü ikbal ile!** хәйерле юл!

J

jambon ветчина; **yarım kilo jambon** ярты кило ветчина

jet реактив көс; **jet motoru** реактив двигатель; **jet uçağı** реактив самолет

jiyan ҡанһыҙ, рәхимһеҙ, ҡурҡыныс

julide туҙған, ялбыраған; **julide saçlar** туҙған сәстәр

jübile юбилей; **jübile gecesi** юбилей кисәһе

jüri жюри; **jüri üyesi** жюри ағзаһы

K

kaba 1. тупаҫ, вульгар, үтә ябай; **kaba adam** тупаҫ кеше; **kaba aletler** үтә ябай ҡорал 2. эре; **kaba un** эре тартылған он ◊ **kaba yel** көньяҡ еле

kabahat ғәйеп, ҡылыҡ, енәйәт; **kabahat işlemek** енәйәт эшләү; **kabahati yüklemek** ғәйепте кемгәлер яһарыу; **kabahat benimdir** ғәйеп миндә, мин ғәйеплемен

kabahatli ғәйепле, енәйәт эшләгән; **kabahatli göstermek** ғәйепләү, ғәйеп табыу

kabak ҡабаҡ; **kabak haşlaması** быҡтырылған ҡабаҡ

kabakulak *мед.* свинка; **kabakulak bulaşıcı bir hastalıkmı?** свинка йоғошло ауырыумы?

kabalık тупаҫлыҡ, тәртипһеҙлек; **kabalık göstermek** тупаҫлыҡ күрһәтеү

kabarmak ҡабарыу, ҡабарып сығыу, күтәрелеү, күбекләнеү; **hamur kabardı** ҡамыр ҡабарҙы

kabile I кендек әбейе, акушерка

kabile II ҡәбилә

kabine 1. кабинет, министрҙар советы; **kabine buhranı** хөкүмәт кризисы; **kabine başkanı** премьер-министр 2. эш бүлмәһе, кабинет; **dişçi kabinesi** теш табибы кабинеты

kabir ҡәбер; **kabir taşı** ҡәбер ташы

kablo кабель; **kablo çekmek** кабель һуҙыу

kabuk ҡабыҡ; **ağaç kabuğu** ағас ҡабығы

kabul 1. риза; **kabulü olmak** риза булыу 2. ҡабул, ҡабул итеү; **kabul günü** ҡабул итеү көнө; **kabul imtihanı** ҡабул итеү имтиханы; **kabul odası** ҡабул итеү бүлмәһе

kaburga ҡабырға; **kaburgaları çıkmak** ныҡ ябығыу, ҡабырғалары сығып тороу

kaç нисә? **kaça?** ни хаҡ? күпме тора? **kaçta?** нисәлә? нисә сәғәттә? **kaç tane?** нисә дана? **kaç tarihinde?** ҡасан? ниндәй ваҡытта? **bugün ayın kaçıdır?** бөгөн айҙың ниндәй көнө? **saat kaçtır?** сәғәт нисә? **Müzeye kadar kaç durak var?** Музейға ҡәҙәр нисә туҡталыш?

kaçar күпмешәр? нисәшәр? күпмешәр тора? **sınıflarda kaçar talebe var?** һәр бер класта нисәшәр уҡыусы?

kaçıncı нисәнсе? **kaçıncı katta oturuyorsunuz?** нисәнсе ҡатта йәшәйһегеҙ?

kaçınmak ҡасыу, ҡурҡыу; **mesuliyetten kaçınmak** яуаплылыҡтан ҡасыу; **masraftan kaçındı** сығымдан ҡурҡты

kaçırmak 1. ҡасырыу, урлап ҡасыу; **kız kaçırmak** ҡыҙ ҡасырыу (урлау); **uykumu kaçırdı** йоҡомдо ҡасырҙы 2. ысҡындырыу, ебәреү; **elden kaçırmak** ҡулдан ысҡындырыу; **fırsatı kaçırmak** яйлы (уңайлы) мәлде ысҡындырыу

kaçlık 1. күпме? күпме тора? **kaçlık kumaş?** материал (тауар) күпме тора? 2. нисә йәш? нисә йәштә? **bu adamı kaçlık tahmin edersiniz?** һеҙҙеңсә, был кешегә нисә йәш?

kaçmak ҡасыу, ҡасып йөрөү, күренмәү; **hapisten kaçmak** төрмәнән ҡасыу; **erkekten kaçmak** ирҙәргә күренмәү; **ben zahetten kaçmam** мин ҡыйынлыҡтан ҡурҡмайым; **uykusu kaçtı** уның йоҡоһо ҡасты; **rahatı kaçtı** тыныслығын юғалтты

kadar 1. ҡәҙәр, тиклем; **bu kadar** был ҡәҙәр; **ne kadar** шул ҡәҙәр 2. кеүек, шикелле; **aslan kadar kuvvetli** арыҫлан кеүек көслө; **çöl kadar geniş** сүл кеүек сикһеҙ

kadın ҡатын, ҡатын-ҡыҙ; **kadın çorabı** ҡатын-ҡыҙ ойоғо; **kadın hastalıkları** ҡатын-ҡыҙ ауырыуҙары; **ev kadını** хужабикә

kadife бәрхәт; **pamuklu kadife** вельвет

kadit һөлдә; **kaditi çıkmak** ныҡ ябығыу

kadro кадрҙар, штат; **kadroyu eksiltmek** штатты ҡыҫҡартыу

kafa баш; **kafa işçisi** аҡыл хеҙмәте кешеһе; **kafası boş** буш баш; **kafasından atmak** башынан сығарып ташлау; **kafası işlemek** башы эшләү

kafes 1. ситлек; **kuş kafesi** ҡош ситлеге 2. рәшәткә; **kafes çit** рәшәткә теҙмә

kafi етерлек; **kafi derecede** етерлек дәрәжәлә; **kafi olmak** етерлек булыу

kağıt 1. ҡағыҙ; **matbaa kağıdı** типография ҡағыҙы; **amdalaj kağıdı** төрөү ҡағыҙы; **kopya kağıdı** күсергес ҡағыҙ 2. хат, яҙма, таныҡлыҡ, документ, справка; **aşı kağıdı** прививка яһалғанлыҡ хаҡында справка; **iyi hal kağıdı** ыңғай характеристика

kahpe 1. аҙғын (боҙоҡ) ҡатын 2. әшәке, ҡәбәхәт, яһил, ҡәһәрле; **kahpe düşman** яһил дошман; **kahpe felek** ҡәһәрле яҙмыш

kahraman ҡаһарман, герой; **Sosyalist emek kahramanı** Социалистик хеҙмәт геройы

kahvaltı 1. иртәнге аш 2. әҙ-мәҙ ҡапҡылау; **kahvaltı etmek** иртәнге аштың ашау; әҙ-мәҙ ҡапҡылап алыу

kahve ҡәһеүә (кофе); **sütlü kahve** һөтлө ҡәһеүә; **kaymaklı kahve** ҡаймаҡлы ҡәһеүә; **acı kahve** шәкәрһеҙ ҡәһеүә; **şekerli kahve** шәкәрле ҡәһеүә; **kahve pişirmek** ҡәһеүә ҡайнатыу

kaide ҡағиҙә; **ahlak kaideleri** әхләҡ ҡағиҙәләре

kalay аҡ ҡурғаш; **kalay kaplamak** ҡурғашлау, ҡурғаш йүгертеү

kalbur эре иләк; **kalbur deliğinden düşmek** иләк аша үтеү

kalça бот, бот ите; **kalça kemiği** бот һөйәге

kaldırmak 1. күтәреү, ҡалҡытыу; **baş kaldırmak** баш күтәреү; **hastayı bir haftada kaldırdı** ауырыуҙарҙы бер аҙнала аяҡҡа баҫтырҙы 2. йыйыу, йыйып алыу, алып китеү; **ekinleri kaldırmak** игенде йыйып алыу; **hastayı hastahaneye kaldırmak** ауырыуҙы хастаханаға алып китеү 3. бөтөрөү, юҡҡа сығарыу, юҡ итеү; **askeri üsleri kaldırmak** хәрби базаларҙы бөтөрөү 4. уятыу, торғоҙоу; **onu erken kaldırmalı** уны иртә уятырға кәрәк 5. күңел болғатыу, ҡоҫҡо килтереү, ҡушытыу; **bu yemek benim içimi kaldırdı** был аш күңелемде болғатты 6. асыу; **perdeyi kaldırmak** пәрҙәне асыу

kale 1. крепость, ныҡытма; **kale duvarı** крепость стенаһы 2. *спорт.* ҡапҡа; **kaleye gol atmak** ҡапҡаға туп индереү

kalem 1. ҡәләм, ручка, перо; **renkli kalem** төҫлө ҡәләм; **boya kalemi** буяу ҡәләме; **kalem açmak** ҡәләм ослау; **kalem kutusu** пенал; **mürekkepli kalem** авторучка

kalın 1. ҡалын; **kalın dudak** ҡалын ирен; **kalın iplik** ҡалын еп; **kalın kumaş** ҡалын тауар 2. ҡуйы, тығыҙ; **kalın kaş** ҡуйы ҡаш; **kalın sis** ҡуйы томан

kalıntı ҡалдыҡ; **radyoaktif kalıntılar** радиоактив ҡалдыҡтар

kalıp 1. форма, модель, ҡалып 2. киҫәк; **bir kalıp sabun** бер киҫәк һабын 3. тышҡы киәфәт; **kalıbına bakarsan aslan gibi**

тышҡы ҡиәфәтенә ҡараһаң, арыҫлан кеүек **4.** хәйлә, аллыҡ; **kalıp etmek** алдау

kalite сифат, сорт; **kaliteli mal** сифатлы тауар; **kalitesi bozuk** насар сифатлы (сортлы)

kaliteli (юғары) сифатлы; **kaliteli çay** юғары сифатлы сәй; **kaliteli eser** юғары художестволы әҫәр

kalkmak 1. аяҡҡа баҫыу, тороу; **sofradan kalkmak** өҫтәл артынан тороу; **saat kaçta kalkarsınız?** сәғәт нисәлә тораһығыҙ? **2.** китеү; **tren kalktı** поезд китте **3.** юғалыу, юҡ булыу, бөтөү; **bu adet çoktan kalktı** был төрөф-ғәҙәт күптән юғалды **4.** һыҙырылыу, һыҙырылып төшөү, шыуыу, шыуып төшөү, ҡубыу, ҡубып төшөү; **örtü kalktı** япма шыуып төштө; **yüzünün derisi kalktı** битенең тиреһе ҡубып төштө **5.** йыйып алыныу; **ürün kalktı** уңыш йыйып алынды

kalmak ҡалыу, туҡталыу; **siz nerede kalıyorsunuz?** һеҙ ҡайҙа туҡталдығыҙ? **yalnız kalmak** яңғыҙ ҡалыу; **adı kaldı** исеме ҡалды

kalp йөрәк; **kalp atması** йөрәк тибеше; **kalbim ağrıyor** йөрәгем ауырта

kambur бөкрө, көмрө; **kambur adam** бөкрө кеше

kamçı ҡамсы, сыбыртҡы; **kamçı çalmak** ҡамсы менән һыҙырыу

kamış ҡамыш; **kamış dam** ҡамыш түбә; **kamış şeker** ҡамыш шәкәре

kamp лагерь; **talim kampı** уҡыу (өйрәнеү) лагеры; **turizm kampı** туристар лагеры; **çadırlı kamp** палаткалы лагерь; **kamp kurmak** лагерь ҡороу; **kamptan dönmek** лагерҙан ҡайтыу

kampana ҡыңғырау; **kampana çalmak** ҡыңғырау ҡағыу

kamus һүҙлек, һүҙ байлығы, лексика; **kamusu ulum** энциклопедия

kamyon йөк машинаһы; **kalkar karasörlü kamyon** самосвал

kan ҡан; **kan damarları** ҡан тамырҙары; **kan basıncı** ҡан баҫымы; **kan gelmek** ҡан ағыу

kanat ҡанат; **kanat açmak** осоп китеү

kanca ырғаҡ, багор; **kanca atmak** ырғаҡҡа эләктереү

kancık инә, оргасы, кәнтәй; **kancık eşek** инә ишәк; **kancık köpek** ҡансай эт

kangal баҫма, бәйләм *(ип)*, урау, уратым; **halat kangalı** бер уратым канат

kanser *med.* рак; **akciğer kanseri** үпкә рагы; **kanser olmak** рак менән ауырыу

kantar бизмән; **kantara çekmek** бизмәндә үлсәү

kanun закон; **toprak kanunu** ер тураһында закон; **tabiat kanunu** тәбиғәт законы; **kanun koymak** закон сығарыу; **ana kanun** конституция

kap I 1. һауыт, һауыт-һаба, пакет, сумка һ. б.; **kap kacak** кухня һауыт-һабаһы; **yemek kabı** мискә, тәриләкә **2.** тыш, тышлыҡ, ҡап, футляр, чехол; **yorgan kabı** юрған тышы

kap II плащ, бөркәнсек; **kap giymek** плащ кейеү

kapak 1. ҡапҡас, тығын; **tencere kapağı** кәстрүл ҡапҡасы; **şişe kapağı** шешә тығыны **2.** ишек; **elbise dolabının kapağı** күлдәк шкафы ишеге

kapalı 1. ябыҡ, бикле; **kapalı elbise** (түше) ябыҡ күлдәк; **kapalı celse** ябыҡ ултырыш (йыйылыш) **2.** болотло, йонсоу *(көнгә ҡарата)*; **bugün hava kapalıdır** бөгөн көн йонсоу

kapamak ябыу, бикләү, ҡаплау; **dolabı kapamak** шкафты ябыу; **kapıyı kapamak** ишекте ябыу; **kitabı kapamak** китапты ябыу; **kitapları dolaba kapamışlar** китаптарҙы шкафҡа бикләгәндәр

kapı 1. ишек, ҡапҡа; **kapıyı çalmak** ишек шаҡыу; **sokak kapısı** ҡапҡа **2.** хеҙмәт урыны; **kapı yoldaşı** хеҙмәттәш, коллега

kaput шинель; **kaput giymek** шинель кейеү

kar ҡар; **kar fırtınası** ҡар бураны; **kar düşmek** ҡар яуыу

kara I ҡара ер, континент, материк; **kara iklimi** континенталь климат; **kara sular** территориаль һыуҙар ◊ **karada kaplan, denizde aslan** ҡоро ерҙә — юлбарыҫ, диңгеҙҙә — арыҫлан

kara II 1. ҡара; **kara toprak** ҡара тупраҡ; **kara derili** ҡара тәнле **2.** ҡайғылы, ауыр, ҡара; **kara haber** ҡайғылы хәбәр; **kara kuvvet** ҡара көстәр

karabiber ҡара борос; **karabiber ekmek** ҡара борос һибеү

karabuğday ҡарабойҙай; **karabuğday lapası** ҡарабойҙай бутҡаһы

karaciğer *анат.* бауыр; **karaciğer atardamarı** бауыр артерияһы

karalamak бысратыу; **duvarı karalamışlar** стенаны бысратҡандар

karanlık 1. ҡараңғылыҡ, ҡараңғы; **karanlık bastı** ҡараңғылыҡ баҫты **2.** *кусм.* шикле, шөбһәле; **kara işler** шикле эштәр

karar 1. ҡарар, резолюция; **karar almak** ҡарар ҡабул итеү; **karara bağlamak** ҡарар сығарыу **2.** тыныслыҡ; **kararını bozmamak** тыныслыҡты боҙмау **3.** тотороҡлолоҡ, тотороҡ, ҡаҡшамаҫлыҡ; **havanın kararı yok** көндөң тотороҡо юҡ

kararlaşmak хәл ителеү; **benim gitmem kararlaştırıldı** минең китеүем хәл ителде

kararlı тотороҡло, тәүәккәл; **kararlı adam** тәүәккәл кеше

kararmak ҡараңғыланыу, ҡараңғы төшөү; **hava kardı** көн ҡараңғыланды; **gözleri kararmış** күҙ алды ҡараңғыланған

kardeş бер туған апай-һеңле (аға́й-эне); **kardeş kızı** бер туғандың ҡыҙы; **kardeş oğlu** бер туғандың улы; **öz kardeş** бер туған аға́й-эне

kardeşlik туғанлыҡ, дуҫлыҡ, берҙәмлек; **kardeşlik bağları** дуҫлыҡ бәйләнештәре

karga ҡарға; **karga yuvası** ҡарға оя́һы

kargış ҡарғыш, ҡәһәр, ләғнәт; **kargış etmek** ҡарға́у, ҡәһәрләү, ләғнәт уҡыу

karı 1. ҡатын, иргә сыҡҡан ҡатын; **karı almak** ҡатын алыу 2. өлкән йәштәге ҡатын; **karı kısmı** ҡатын-ҡыҙ

karın 1. ҡарын; **karını aç** ҡарыны ас; **karını tok** туҡ 2. аҡыл, күңел, уй; **karından geçmek** уй килеү

karınca ҡырмыҫҡа

karış ҡарыш; **karış boylu** ҡарыш буйлы, бик бәләкәй

karışık аралаш, ҡатнаш; бола, тыныслыҡһыҙ, борсоулы; **karışık orman** аралаш урман; **karışık zaman** борсоулы заман

karışıklık буталсыҡлыҡ, тәртипһеҙлек, бола; **karışıklık çıkarmak** бола сығарыу

karıştırmak аралаштырыу, ҡатыштырыу; **toprağı kumla karıştırmak** тупраҡты ҡом менән ҡатыштырыу

karin яҡын, күрше; **karin olmak** күрше булыу

karlamak яуыу *(ҡарға ҡарата)*; **hava karlıyacağa benziyor** ҡар яуыр шикелле

karmaşık буталсыҡ, тәртипһеҙ; **karmaşık bir fikir** буталсыҡ фекер

karpuz ҡарбуз

karşı 1. ҡаршы; **karşıya geçmek** ҡаршыға сығыу 2. *бәйл.* ҡаршы; **akşama karşı** кискә ҡаршы

karşılamak 1. ҡаршылау, ҡабул итеү; **teklifi iyi karşıladılar** тәҡдимде яҡшы ҡабул иттеләр 2. ҡаплау, ҡайтарыу; **masrafları karşılamak** сығымды ҡайтарыу 3. булдырмау, юл ҡуймау; **bu ilâç sıtmayı karşılar** был дарыу биҙгәк ауырыуын булдырмай

karşılaşma осрашыу

karşılaşmak 1. осрашыу 2. әләгешеү, сәкәләшеү; **toplantıda onunla fena karşılaştık** йыйылышта уның менән нык сәкәләштек

karşılık 1. тап килеү, ярашлылыҡ, эквивалент; **doların Türk parasıyle karşılığı** Төрөк аҡсаһында доллар эквиваленты 2. яуап; **ağır bir karşılık** тупаҫ яуап; **mektubunuza karşılık olarak** хатығыҙға яуап булараҡ

karşılıklı ике яҡлы; **karşılıklı antlaşma** ике яҡлы килешеү

kart I ҡарт, өлкән йәштәге; **kart adam** ҡарт кеше

kart II 1. карточка; **duhuliye kartı** пропуск 2. открытка

kas мускул; **yürek kası** йөрәк мускулы

kasım ноябрь; **kasım ayı** ноябрь айы

kasmak кесерәйтеү, ҡыҫҡартыу, тарайтыу; **gömleğin kollarını biraz kasmalı** күлдәк еңен бер аҙ ҡыҫҡартыу

kasvet ҡайғы, хәсрәт, көйөк, һағыш

kasvetli 1. ҡайғылы, хәсрәтле, һағышлы, күңелһеҙ, бойоҡ; **kasvetli adam** ҡайғылы кеше 2. ҡараңғы, болотло; **kasvetli gün** ҡараңғы көн

kaş ҡаш; **kalem kaş** ҡәләм (ҡыйғас) ҡаш; **kaş atmak** ҡаш һикертеү

kaşık ҡалаҡ; **çorba kaşığı** аш ҡалағы; **tatlı kaşığı** сәй ҡалағы

kaşınmak тырнаныу, ҡашыныу; **ayağım kaşınıyor** аяғым ҡысыта

kat ҡат; **alt kat** аҫҡы ҡат; **evin ikinci katı** өйҙөң икенсе ҡаты

katar 1. каруан, төркөм, колонна; **deve katarı** дөйәләр каруаны; **otomobil katarı** автомобилдәр колоннаһы; **turna katarı** торналар төркөмө 2. поезд, эшелон, состав; **askeri katar** хәрби эшелон; **yük katarı** йөк поезы

katı ҡаты; **katı cisim** ҡаты есем; **katı söz** ҡаты һүҙ

katmak 1. өҫтәү, ҡушыу, ҡатыштырыу; **sirkeye su katmak** һеркәгә һыу ҡушыу 2. ҡушыу, ҡыуып ҡушыу; **kuzuları sürüye katmak** һарыҡтарҙы көтөүгә ҡушыу

katre тамсы; **katresi kalmadı** тамсыһы ла ҡалманы

katran ыҫмала, дегет; **bitki katranı** тәбиғи ыҫмала; **maden katranı** ташкүмер ыҫмалаһы

kavak тирәк; **ak kavak** аҡ тирәк

kavga талаш, ыҙғыш, ғауға; **kavga çıkarmak** ғауға сығарыу, ыҙғышыу

kavruk 1. ҡороған, кипкән; **kavruk yaprak** кипкән япраҡ 2. *күсм.* ябыҡ, сибек; **kavruk çocuk** сибек бала

kavuşmak ирешеү, ҡаҙаныу, табыу, өлгәшеү, яулап алыу; **hürriyete kavuşmak** ирек яулап алыу; **mutlu rahat bir hayata kavuşmak** бәхетле иркен тормошҡа ирешеү

kavuşturmak ҡаушырыу; **elleri kavuşturup oturmak** ҡул ҡаушырып ултырыу

kayak саңғы; **kayak kaymak** саңғыла йөрөү

kaybetmek юғалтыу; **kitap kaybettim** китап юғалттым; **şemsiye kaybettim** зонтик юғалттым; **vesika ve paralarımı kaybettim** документ һәм аҡсаларымды юғалттым

kaygı хәстәрлек күреү, ҡайғыртыу, хәстәрлек; ҡайғы, һағыш; **kaygı göstermek** хәстәрлек күрһәтеү

kayık кәмә; **balıkçı kayığı** балыҡсы кәмәһе; **yelkenli kayık** елкәнле кәмә; **motörlu kayık** моторлы кәмә

kayıkçı кәмәсе, ишкәксе

kayıp юғалтыу; **acı bir kayıp** ауыр юғалтыу

kayırmak хәстәрлек күреү, ярҙам итеү

kayısı абрикос, өрөк; **kayısı ağacı** өрөк ағасы

kayış ҡайыш; **bel kayışı** бил ҡайышы

kayıt яҙылыу, теркәлеү, регистрация; **kayıttan düşmek** учеттан төшөү; **müfredat kayıtı** ведомость

kaymak I ҡаймаҡ, крем; **kaymak ağzı** ҡаймаҡ өҫтө

kaymak II шыуыу, тайыу; **ayağım kaydı** аяғым тайҙы

kaynak 1. шишмә, сығанаҡ; **kaynak suyu** шишмә һыуы; **ısı kaynağı** эҫелек сығанағы; **ışık kaynağı** яҡтылыҡ сығанағы 2. *тех.* иретеп йәбештереү, сварка; **kaynak çeliği** иретеп йәбештереү ҡоросо

kaynaklamak иретеп йәбештереү

kaynamak 1. ҡайнау; **çay kaynamaya başladı** сәй ҡайнай башланы 2. тулҡынланыу; **deniz kaynıyor** диңгеҙ тулҡынлана 3. бығырлау, көтөрләү; **midem kaynadı** эсем көтөрләне

kaynaşma сыуалыш, бола; **memleketteki kaynaşmalar** илдәге сыуалыштар

kaypak тайғаҡ; **kaypak bir yol** тайғаҡ юл

kaz ҡаҙ; **kaz palazı** ҡаҙ бәпкәһе; **kaz tüyü** ҡаҙ ҡауырыйы

kaza 1. ҡаза, бәлә-ҡаза; **kaza geçirmek** ҡаза кисереү 2. яҙмыш; **kazaya rıza** яҙмыш менән килешеү

kazan ҡаҙан; **buhar kazanı** пар ҡаҙаны; **kazan tozu** ҡаҙан юшҡыны

kazanç эш хаҡы, керем; **senelik kazanç** йыллыҡ керем; **bu adamın aylık kazancı bin liradır** был кешенең эш хаҡы мең лира

kazanmak 1. эшләп аҡса алыу, аҡса табыу; **hayatını kazanmak** йәшәү өсөн аҡса табыу 2. яулау, ҡаҙаныу; **birinciliği kazanmak** беренселекте яулау; **şöhret kazanmak** шөһрәт ҡаҙаныу

kazı ҡаҙып эҙләү, ҡаҙып тикшереү эштәре; **kazı yapmak** ҡаҙып тикшереү

kazık ҡаҙыҡ, баҫана, свай; **kazığa bağlamak** ҡаҙыҡҡа бәйләү; **kazıklar üzerinde kurulmuş bina** свай өҫтөнә һалынған бина

kazmak ҡаҙыу, соҡоу; **çukur kazmak** соҡор ҡаҙыу

keçe кейеҙ; **keçe parçası** кейеҙ киҫәге

keçi кәҙә; **keçi yavrusu** кәҙә бәрәсе

keder хәсрәт, һағыш, ҡайғы; **keder getirmek** ҡайғы китереү; **keder etmek** хәсрәтләнеү, ҡайғырыу

kedi бесәй; **kedi yavrusu** бесәй балаһы; **erkek kedi** ата бесәй

kel таҙ, яланғас; **kel baş** таҙ баш; **kel dağ** яланғас тау

kelebek күбәләк; **gece kelebekleri** төнгө күбәләктәр

keler кәҫәртке

kelime һүҙ; **kelime hazinesi** һүҙ байлығы

kelle баш; **bir kelle peynir** бер баш сыр; **iki kelle lahana** ике баш кәбеҫтә

keman скрипка; **keman çalmak** скрипкала уйнау

kemik һөйәк; **boyun kemikleri** муйын һөйәктәре

kenar сит, ҡыр; **köy kenarı** ауыл сите; **orman kenarı** урман сите

kere тапҡыр; **birkaç kere** бер нисә тапҡыр; **çok kere** күп тапҡыр; **kaç kere?** нисә тапҡыр?

kese I ҡапсыҡ, янсыҡ; **para kesesi** аҡса янсығы; **tütün kesesi** тәмәке янсығы

kese II ҡыҫҡа, ҡыҫҡаса; **kese yol** ҡыҫҡа юл

kesir ҡәсер; **kesir sayısı** кәсер һаны

keskin 1. осло, үткер; **keskin bıçak** үткер бысаҡ; **keskin göz** үткер күҙ **2.** үткер, әсе; **keskin rüzgar** әсе ел; **keskin bir soğuk** әсе һыуыҡ **3.** көслө, ҡаты; **keskin tütün** көслө тәмәке

kesmek 1. киҫеү, ҡырҡыу; **tırnak kesmek** тырнаҡ ҡырҡыу; **eti kesmek** итте киҫеү **2.** һуйыу, салыу; **koyun kesmek** һарыҡ һуйыу **3.** туҡтатыу, өҙөү, бөтөрөү; **ateşi kesmek** атышты туҡтатыу; **münasebeti kesmek** мөнәсәбәтте өҙөү

keyif кәйеф; **keyfiniz iyi mi?** кәйефегеҙ яҡшымы? **keyifi bozmak** кәйеф боҙоу

kıl ҡыл, сәс, шырт; **at kılı** ат ҡылы

kılçık ҡылсыҡ; **balık kılçığı** балыҡ ҡылсығы

kılıç ҡылыс; **kılıç namlusu** ҡылыс йөҙө; **kılıç açmak** ҡылыс үткерләү

kılık тышҡы ҡиәфәт, йөҙ; **kılığını değiştirmek** ҡиәфәтен үҙгәртеү

kımız ҡымыҙ; **kımız içmek** ҡымыҙ эсеү

kın ҡын, кобура, футляр; **kının dan çekip çıkarmak** (пистолетты) кобуранан сығарыу

kır һорғолт, асыҡ һоро, сал, бурыл; **kır at** бурыл ат; **kır saçlı** сал сәсле; **kır sakal** сал һаҡал

kırık 1. ватылған, һынған, емерелгән, ватыҡ, һыныҡ, емерек; **kırık sandalye** емерек ултырғыс; **beli kırık** биле һынған **2.** ярмә; **arpa kırığı** арпа ярмаһы; **buğday kırığı** бойҙай ярмаһы

kırılmak 1. ҡырылыу, ватылыу, емерелеү; **bu evin pencekeleri kırılmıştır** был өйҙөң тәҙрәләре ватылған **2.** күмәклән һәләк булыу, үлеү, ҡырылыу; **açlıktan kırılmak** аслыҡтан ҡырылыу

kırk ҡырҡ; **kırkta bir** ҡырҡтан бер

kırlangıç ҡарлуғас; **kırlangıç yuvası** ҡарлуғас ояһы

kırmak 1. ватыу, емереү, ҡырыу, ҡырҡыу, ярыу; **odun kırmak** утын ҡырҡыу **2.** онтау, ваҡлау; **taş kırmak** ташты ваҡлау **3.** тар-мар итеү, ҡырыу; **düşmanı kırmak** дошманды ҡырыу **4.** төшөрөү, кәметеү; **fiat kırmak** хаҡты төшөрөү

kırmızı ҡыҙыл; **kırmızı bayrak** ҡыҙыл байраҡ

kısa ҡыҫҡа, тәбәнәк; **kısa etek** ҡыҫҡа итәк; **kısa boylu** тәбәнәк буйлы

kısır ҡыҫыр; **kısır inek** ҡыҫыр һыйыр; **kısır toprak** ҡыҫыр (уңдырышһыҙ) тупраҡ

kısmak 1. ҡыҫҡартыу; **masrafı kısmak** сығымды ҡыҫҡартыу 2. ҡыҫыу; **gözleri kısmak** күҙҙәрҙе ҡыҫыу

kıssa хикәйә, повесть; **kıssa okumak** хикәйә уҡыу

kıstırmak ҡыҫтырыу; **parmağını kapıya kıstırdı** бармағын ишеккә ҡыҫтырҙы

kış ҡыш; **kış kıyamet** үтә һыуыҡ ҡыш; **Kış Baba** Ҡыш бабай; **kış bastırdı** ҡыш башланды

kıt (кәрәгенсә) етмәгән, (теләгәнсә) етешмәгән, йоҡа, таҡыр, ярлы; **kıt mal** (кәрәгенсә) етмәгән тауар; **bu yıl mahsul kıt** быйыл уңыш йоҡа; **kıt akıllı** аҡылы таҡыр

kıtlık ҡытлыҡ, мохтажлыҡ; **kıtlıkta kalmak** мохтажлыҡта ҡалыу

kıvanç 1. ғорурлыҡ; **kıvanç duymak** ғорурлыҡ тойоу, ғорурланыу 2. шатлыҡ, ҡыуаныс; **kıvanç hisi** ҡыуаныс хисе

kıvırcık тулҡынланып торған, бөҙрә; **kıvırcık saç** бөҙрә сәс

kıyafet 1. тышҡы күренеш, ҡиәфәт, йөҙ 2. кейем, костюм; **sahra kıyafeti** юл кейеме; **spor kıyafeti** спорт костюмы

kıymet 1. баһа, хаҡ; **kıymet biçmek** хаҡ ҡуйыу 2. мөһимлек, әһәмиәт; **kıymetini bilmek** әһәмиәтен белеү

kız ҡыҙ, ҡыҙ бала; **yetişkin kız** еткән ҡыҙ; **ihtiyar kız** ҡарт ҡыҙ; **kız çocuk** ҡыҙ бала; **kız arkadaş** әхирәт

kızak сана; **kızak arabası** сана; **kızak kaymak** санала шыуыу; **ayak kızakları** саңғы, коньки; **su kızağı** һыу саңғыһы

kızarmak ҡыҙарыу; **yüz kızarmak** йөҙ ҡыҙарыу

kızıl ҡыҙыл; **kızıl bayrak** ҡыҙыл байраҡ

kızışmak ҡыҙыу; **kavga kızıştı** бәхәс ҡыҙҙы

kibrit шырпы; **kibrit başı** шырпы башы; **kibrit kutusu** шырпы ҡабы

kilise сиркәү, собор; **katolik kilisesi** католик сиркәүе

kilit йоҙаҡ; **kilit açmak** йоҙаҡты асыу

kim кем; **kimin** кемдеке, кемдең; **kiminle?** кем менән? **benimle kim gelecek?** минең менән кем бара? **senin kimin var?** һинең кемең бар?

kimi бәҙәр, ҡайһы бер; **kimi insanlar** ҡайһы бер кешеләр; **kimi gün** ҡайһы саҡта; **kimi zaman** ҡайһы ваҡытта

kimse кемдер; **bir çok kimseler** күптәр

kimya химия; **organik kimya** органик химия; **kimya olayları** химия күренештәре

kinaye 1. кинәйә, ситләтеп әйтеү; **kinaye ile söylemek** ситләтеп һөйләү 2. *әҙәб.* метонимия, метафора

kip 1. өлгө, ҡалып, модель 2. *лингв.* һөйкәлеш; **kip ekleri** һөйкәлеш ялғауҙары

kir бысраҡ, кер; **kir göturmek** кер күтәреү *(төҫкә ҡарата)*

kiralık арендаға алынған; **kiralık araba** арендаға алынған машина, такси

kiracı арендатор; **biz bu evde kiracıyız** беҙ был өйҙең арендаторы

kireç эҙбиз; **kireç harcı** эҙбиз иҙмәһе

kirlenmek керләнеү, бысраныу; **havlu kirlendi** таҫтамал керләнде

kirpi терпе; **kirpi iğnesi** терпе энәһе

kirpik керпек; **kirpiği kirpiğine değmemek** керпек тә ҡаҡмау

kişi кеше; **bilgin kişiler** ғалим кешеләр

kitabe тышына (өҫтөнә) яҙылған яҙыу, эпитафия; **mezar kitabesi** ҡәбер ташына яҙылған яҙыу; **orhon kitabeleri** орхон яҙыуҙары

kitabet яҙма, яҙыу; **kitabet dili** яҙма тел

kitap китап; **kitap zarfı** китап тышы; **el yazması kitaplar** ҡулъяҙма китаптар; **ders kitabı** дәреслек

koca I ир; **kocaya gitmek** иргә(кейәүгә) сығыу; **kocaya vermek** кейәүгә биреү

koca II 1. бик ҙур, бик өлкән, сикһеҙ ҙур; **koca memleket** бик ҙур ил 2. ҡарт, оло 3. бөйөк, танылған; **koca şair** бөйөк шағир

kocamak ҡартайыу, олоғайыу

koç тәкә

koku 1. еҫ; **güzel koku** хуш еҫ; **bahar kokusu var** яҙ еҫе килә 2. хушбуй; **koku sürmek** хушбуй һөртөү

kol 1. ҡул; **kol saati** ҡул сәғәте; **kolları arasına almak** ҡосаҡлау 2. ең; **kol kapağı** манжет, беләҙек 3. тотҡа, рычаг

kolay еңел, аңһат; **kolay ders** еңел дәрес; **kolay iş** еңел эш

kollamak 1. көтөү, көтөп тороу, һаҡлау; **fırsat kollamak** форсат көтөү 2. ҡайғыртыу, хәстәрлек күреү; **zayıfları kollamak** көсһеҙҙәр хаҡында ҡайғыртыу 3. ҡарау, күҙәтеү, өйрәнеү; **etrafı kollamak** тирә-йүнде күҙәтеү

